ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

1-7 октябрь (ҡарасай) 2022

№39 (1029)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Һәр кемде борсой...**



5-6

**Ҡартаямы ни һуң йөрәк...**

маңлайҙар һырланһа ла?



8-9

**Һөйөү орлоғо сәскәндәр,**

мин дә һөйөү орлоғо сәсәм...



11

**Зарлы түгел олпат уҙаман**



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 3 октябрҙән 13 октябргә тиклемге ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2023 йылдың беренсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 642 һум 38 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

*УЙЛЫҒА - УЙ*



# ПЕНСИЯЛА ЯҠШЫ ТҮГЕЛ...

## ә бик яҡшы!

**Электән дә республикабыҙҙағы ваҡытлы матбуғат сараларын байҡамай тора алмаған кеше булараҡ, инде хаҡлы ялға сыҡҡас, гәзитһеҙ ғүмер итеүҙе айырыуса күҙ алдына килтерә алмайым. Минең пенсияға киткән мәлем "Киске Өфө"нөң сығарыла башлаған осорона тап килде. Әленән-әле ҡатмарланып торған был тормошобоҙҙо һәр яҡлап яҡтыртыуға өлгәшеп, баштан уҡ күңелгә ятҡан шул гәзит тиҙ арала айырылғыһыҙ дуҫыма ла әйләнде.**

Һәр һанын ныҡ ҡына көтөп алам. Инде нисәмә йыл, почтальондың өйгә килтергәнен дә көтөп тормай, аҙна һайын гәзитте үҙем барып алып йөрөүемә почта хеҙмәткәрҙәре лә күнегеп киткән. Мин барып инеү менән, һорап та тормаҫтан, баш ҡаланан әле генә килгән төргәкте аса һалып, "Киске Өфө"мде тоттороп та ебәрәләр. Башҡа бихисап мәғлүмәттәрҙән тыш, йыш ҡына аҡһаҡал һәм ағинәй фекерҙәрен дә сағылдырған был баҫма төрлө йәштәгеләр, шул иҫәптән, пенсионерҙар өсөн дә үҙе бер рухи аҙыҡ булып тора ла баһа! Урыҫ әйтмешләй, "Не хлебом единым сыт человек". Бындай гәзитте алдырмағандар, әлбиттә, күп нәмәнән мәхрүм. Халҡыбыҙҙа "Сатан күп йөрөр, һуҡыр күп күрер" тигән уйынлы-ысынлы бер әйтем йөрөй. Мин "һаңғырау күп ишетер" тип тә өҫтәп ебәрмәк булам әле. Үҙем ишетеү буйынса инвалид булараҡ та әйтәм шул. Гәзиттәребеҙҙе "тетеп" уҡып йөрөүем арҡаһында байтаҡ ҡына мәғлүмәттәр тураһында хатта ҡайһы бер яҡшы ишеткән кешеләргә ҡарағанда ла нығыраҡ хәбәрҙармын, тиһәм дә маһайыу булмаҫ. Бының менән мин хаҡлы ялдағы тиҫтерҙәремә "Гәзит уҡыуҙан бер ҡасан да айырылмағыҙ!" тип әйтмәксемен.

Ошо гәзитебеҙ аша төрлө авторҙарҙың яҙмаларын уҡырға, шул уҡ ваҡытта, үҙемдең дә уй-фекерҙәрем менән бүлешеп алырға ғәҙәтләнгәнмен. Был юлы ла олпат йәштәргә еткән йә яҡынлашып барған милләттәштәрем менән ғүмеребеҙҙең айырып алғыһыҙ бер мәле - ҡартлыҡ тураһында тағы бер килке һөйләшеп алмаҡ булдым. "Йылғыр йылдар маңлайҙарға һырҙарын һыҙа икән. Уйлаһаң-уйламаһаң да, ғүмерҙәр уҙа икән..." тип яҙғайны мәшһүр Абдулхаҡ ағай Игебаев. Уны һағышлы итеп йырға ла һалғандар. Күптәр, ошондай юҫыҡта һүҙ сыҡһа, ысынлап та үҙенең ҡартлығы менән риза булмай, "Ҡартлыҡ - шатлыҡ түгел", тип кенә ебәрә. Әлбиттә, йәшлегенең үтеп китеүенә һәр кемдең үҙ ҡарашы. Тыуыуына, балалыҡ, үҫмер, йәшлек йылдары кисереүгә күптәр ифрат тыныс, хатта вайымһыҙ ҙа ҡараһа, ҡартлыҡ баҫа башлау менән ошо дәүеренең дә нормаль физиологик процесс икәнлеге менән килешкеһе килмәй. Ә мин иһә, беҙҙе оло быуын кешеһе булып йөрөргә Аллаһ Тәғәлә насип итеүен ғәйәт ҙур бәхет тип атағым килә (бик күптәр бындай бәхетте татый алмай). Бына ошо алтын көҙөбөҙҙөң ҡәҙерен белеп, һис кенә лә төшөнкөлөккә бирелмәй йәшәргә саҡырыуым.

**(Дауамы 9-сы биттә).**

*КӨНАУАЗ*

# ИҪӘН-ИМЕН ҠАЙТҺЫНДАР!



**Илдәге бөгөнгө хәлдәр, өлөшләтә мобилизация булып ятҡан был көндәрҙә башҡа бөтөн мәсьәләләр кесерәйеп, мәғәнәһен юғалта төҫлө тойолһа ла, тәүге хафаланыу билдәләре бер аҙ ғына баҫыла төшкәндәй. Сөнки мобилизацияланған йәш ир-егеттәрҙең берҙәм һәм әүҙем сафтарын күреп, күңелдә һыҙланыу ҡатыш ғорурлыҡ тойғоһо ла уяна.**

Ҡайһы берәүҙәрҙең, айырыуса ғәзиз улдарын армия сафына оҙатыусы әсәләрҙең хәүеф һәм боролоу белдереүҙәре, илаулауҙары бик аңлашылған хәлдә лә, бәхеткә, был иһә уландарыбыҙ йөҙөндә бер ҙә һиҙелмәй: улар яҡындарынан айырылып, әлегә ирекле сафҡа теҙелеп китеп баралар һәм үҙ-ара тыныс ҡына һөйләшеп, ҡайһылары йырлашып, бәғзеләре мәрәкәләшеп, шым ғына көлөшә-көлөшә атлайҙар. Ә инде Сибай, Баймаҡ егеттәренең **(һүрәттә)** баянда уйнап, "Шайморатов генерал"ды йырлап барған видеокадр бөтөн интернетты яңғыратты, афарин, яҡташтар! Яуҙа ла шулай батыр, сапсан, үткер булығыҙ! Мобилизация үткән егеттәребеҙҙең әле дары ла еҫкәмәгән, башланғыс хәрби әҙерлек тә үтмәгән "йәшел" түгеллектәре, уларҙың үҙ ғүмерҙәрендәниндәйҙер хәрби әҙерлек тәжрибәһенә эйә булыуҙары шуғалыр ҙа үҙҙәрен ышаныслы тотоштарынан да күренә. Ни хәл итәһең, ил хәүефһеҙлеген ҡурсып, ир-егеттәребеҙҙең ҡалҡандай ҡалҡыуы бер бөгөн түгел, борондан килгән изге бурыс, ата-баба йолаһы.

**(Дауамы 3-сө биттә).**

12+

✓ *Иген уңған һайын, икмәккә хаҡ та нишләптер арта бара. Быны нисек аңларға? Властар аңлатыуынса, был хәл "етештереүселәр һәм һатыусыларҙың сығымдары" менән аңлатыла икән дә...*



"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 20 ЙЫЛ

# КҮПЕРТЕҮ ЮҠ,
## ялағайланыу юҡ уның биттәрендә



**Һәр яҙма баҫманың үҙ тарихы, үҙ үткәне, бөгөнгөһө һәм киләсәге. Гәзит йәки журналды булдырыу, башлап ебәреү өсөн ҙур ынтылыш һәм теләк кәрәк, ә уны халыҡҡа таратыу, танытыу, үҙ иттереү иһә көс һәм ваҡыт талап итә. Ләкин ваҡытлы баҫмаға ҡарата халҡыбыҙҙың "Башланған эш - бөткән эш", тигәне бер ҙә тура килмәй, сөнки был өлкәлә иң мөһиме башланғанды ташлап ҡуймаҫлыҡ рухи көс, гәзит етәксеһенең һәм хеҙмәткәрҙәренең үҙ эшенә мөкиббән бирелеүе кәрәк. Шулай уҡ гәзит уҡыусыһының иғтибарын оҙаҡ йылдар юғалтмайынса, һәр саҡ кәрәкле, файҙалы һәм барыһы тарафынан да көтөп алынған баҫма булып ҡалыу мөһим. Шул саҡта ғына баҫма оҙон ғүмерле буласаҡ, тигән ышаныс бар.**

Республикабыҙҙың иң алдынғы һәм ихтирамлы баҫмаларының береһе "Киске Өфө" ике тиҫтә йыл бөтә был талаптарға яуап биреп, гәзит уҡыусыларҙың сифатлы мәғлүмәткә булған һыуһынын ҡандырып йәшәп килә. "Үҙемә кәрәкле мәғлүмәтте интернет киңлектәрендә лә табам мин", тип әре сирттереүселәр күп хәҙер. Ысынлап та, мәғлүмәттең ниндәйе генә юҡ та, ул нисәмә генә төрлө итеп бирелмәй. Ләкин уларҙың барыһын да үҙ эшенең оҫталары еткермәй беҙгә, ундағы авторҙарҙың мәҡәләләрендә ялған да, ысынбарлыҡҡа тап килмәгән хәбәр ҙә, арттырыу ҙа йыш осрай торған күренеш. Ә ошондай хәлде баҫма гәзит-журналда осрата алаһығыҙмы, йәмәғәт? Юҡ, сөнки һәр ҡағыҙ баҫма үҙ иңендә оло яуаплылыҡ тоя. "Киске Өфө" гәзите лә улар рәтендә. Әлеге баҫманың тағы бер күңелемә яҡын яғы - күпертеү, ялағайланыу юҡ уның биттәрендә. Мәҡәлә геройҙары яһалмалыҡтан азат, һүҙҙәре ихлас һәм йөрәккә үтеп инә. Бер мәҡәлә лә гәзит битен тултырыу өсөн генә яҙылмай, уларҙың барыһы ла фәһем бирерлек, файҙа килтерерлек, уйҙарға һалырлыҡ, күңелдәрҙе елкетеп ебәрерлек.

Электрон баҫмалар мәғлүмәт еткереүҙең альтернатив варианты ғына, минеңсә. Ғалим, психолог һәм социологтар фекеренсә, ҡағыҙ баҫмаларҙағы мәғлүмәт мейегә нығыраҡ һеңә, тексты уҡыу еңелерәк бирелә. Шулай уҡ теге йәки был баҫма тураһында беҙ нәҡ ҡағыҙ битендә баҫылған варианттан сығып фекер йөрөтәбеҙ һәм баһалайбыҙ. Бына "Киске Өфө" гәзитенең дә электрон варианты ла бар, социаль селтәрҙәрҙә лә ул әүҙем эшләй. Был дөрөҫ, сөнки заман талабынан артта ҡалырға ярамай. Мин үҙем социаль селтәрҙәрҙә лә, телеграм каналында ла "Киске Өфө"гә яҙылғанмын, унда бирелгән һәр мәғлүмәтте ҡарап-танышып барам. Ләкин ҡулға ҡағыҙ гәзит тотоп уҡымайынса, танһыҡ ҡанмай, шуға шәмбене көтөп алам, сөнки нәҡ ошо көндә йортҡа гәзит килә.

Бер үк мәғлүмәтте төрлөсә еткерергә була. Һәм бер үк мәғлүмәтте төрлөсә аңларға мөмкин. Шуға күрә гәзит-журналдарҙың төп бурысы беҙгә, гәзит уҡыусыларға, дөрөҫлөккә тап килгән, бармаҡтан һурып сығарылмаған, зиһендәрҙе асҡан, аҙашҡандарға дөрөҫ юлды күрһәтерҙәй, мәғлүмәтле мәҡәләләр тәҡдим итеү. Был йәһәттән "Киске Өфө"бөҙ бер ҙә һынатмай.

**Илһам ШӘРИФУЛЛИН.**
**Учалы районы.**

БЫЛ АЙҘА...

# КӨҘ КИЛЕШЕ ЙӘЙЕНӘН БИЛДӘЛЕ

**Бына октябргә лә аяҡ баҫтыҡ. Ҡояш апай һирәгерәк йылмая, был аңлашыла ла: уға ла ял кәрәк, ни тиһәң дә, салт аяҙ көнлө, сәскәле-еләкле йомарт йәй бүләк итте беҙгә. Өтөп алырҙай ҡыҙыуы менән көтөү-көтөү халыҡты һыу буйҙарына ҡыуып төшөрҙө, бил-бауырҙан иген-бесән үҫтерҙе, шул арала ер йөҙө емеш-еләген өлгөртә һалды... Ҡуй инде, алһыҙ-ялһыҙ эшләне. Сеү, ҡояш апаҡайыбыҙ болот сымылдыҡтары эсендә серем итә хәҙер күберәген.**



Бының был яғына ары-бире һирәкләп булһа ла йоҡомһораған йөҙөн күрһәтеп алһа ла разый булырбыҙ, шәйт, сөнки синоптиктар йонсоу болотло көндәр, һалҡын һауа, һыуыҡ ямғырҙар ғына вәғәҙә итә. Әйткәндәй, "Ирекле пресса" тигән бер онлайн сығанаҡ ай һайын "аномаль һауа торошо, аҡылын юйған миҙгел" көҫәп, былай ҙа бойоҡ күңелгә хафа һалырға әҙер генә тора. Йәйгә ҡарата ла шундай уҡ фараздары, бәхеткә, аҡланманы, шуға ҡарамаҫтан, юҡ, хәүеф юрауҙан һис арына алмайҙар. Рәсәй һәм Башҡортостан Гидрометеорология үҙәге белгестәре иһә ыңғай көйләнештә эшләй: көҙ көҙсә булыр, ти улар. Уртаса һауа температураһы был айҙа, улар фаразына ҡарағанда, тәүге ун көнлөктә - плюс 10-11, икенсеһендә 8-9 градус йылы һәм ай ахырында термометр терегөмөшө түбәнәйә барып, ни бары уртаса 3 градус йылылыҡты күрһәтәсәк. Теге "ирекле"ләр юраған тәбиғәт стихиялары ҡоро фараз ғына булып ҡала күрһен инде!

...Был айҙа ағастарҙан һуңғы япраҡтар ҡойола, урман яланғасланып, тып-тын ҡала, ҡоштар йылы яҡтарға осоп китә, андаһанда ғына ҡышлай ҡалған урман турғайҙары йоҡо аралаш сипылдашып ҡуя - тынлыҡ... Ялан ҡырҙарҙа ла көҙгө эштәр тына. Әйткәндәй, быйылғы иген уңышы байтаҡ йылдар инде ҡабатланмаған рекорд бирҙе, ниһайәт! Билдәле булыуынса, Башҡортостан игенселәре 4,9 млн тоннанан ашыу уңыш йыйып алды, тик хәҙер уның ышаныслы буралар ҙа һаҡланып, сифатлы эшкәртелеүенә өмөт итергә ҡала. Юғиһә бит, йыйылған уңышты һаҡларға етерлек урын булмай аптыратты! Шунлыҡтан, ҡайһы бер баҫыуҙарҙа, мәҫәлән, Ҡырмыҫҡалы районында, ашлыҡ өйөмдәре асыҡ һауа аҫтында ҡалды, тип яҙҙылар. "Беҙ быңдай уңыш көтмәгәйнек", - тигән һүҙҙәр бер нисек тә аҡланыу була алмай, әлбиттә. Бөгөнгө заманса электрон-техник мөмкинлектәр менән уңыш прогнозын ғына самаларға булалыр бит? Элек тәжрибәле агроном йә ябай ер хужаһы күҙ күреме менән дә самалап, гектарынан күпме уңыш алынасағын һаны-проценты менән теүәл әйтеп бирер ине. РБК бынан алдараҡ хәбәр итеүенсә, республика Ауыл хужалығы министрлығы рекордлы уңыш, хатта ки 5 миллионғаса иген йыйып алырҙы самаламаған түгел бит, тимәк, көтөлгән, насип уңыш был! Юғиһә, уңыш серен бай техника, прогрессив технология, селекцияға, ә бәлки, команда-бойороҡ ысулдарына ғына ҡайтарып ҡалдырыу ғәҙел булыр инеме? Баяғыса, уңай һауа торошо, уңған Ҡояшбикәбеҙ эше түгел был, тип кем әйтмәҫ!

Хәҙер китер, әлбиттә, маҡтауҙар, наградалар, үрләүҙәр... Ә бына әсе тирен түгеп, көн-төн комбайнынан төшмәгән ябай игенсе, әлбиттә, һис шикһеҙ оло маҡтауға лайыҡ, һүҙ ҙә юҡ. Шуны ғына көткәндәй, был ай календарында Ауыл хужалығы һәм эшкәртеү сәнәғәте эшсәндәре көнө **(9)** тып итеп көтөп тә тора. Әйткәндәй, юғары уңыш, һис һүҙһеҙ, Республикабыҙ көнөнә лә **(11)** лайыҡлы бүләк булды түгелме? Ошондай тантаналы көйләнеш боҙолмаһа ине лә бит... Анда-бында барыбер ҡолаҡҡа килеп ишетелеүенсә, халыҡ трибунаһына әүерелгән интернет яҙмаларҙан күренеүенсә, иген уңған һайын, икмәккә хаҡ та нишләптер арта бара. Быны нисек аңларға? Властар аңлатыуынса, был хәл "етештереүселәр һәм һатыусыларҙың икмәк төрөүгә киткән һәм коммуналь хеҙмәттәр, транспорт-яғыулыҡ сығымдары" менән аңлатыла икән дә... Сауҙа министрлығы шулай тигән. Икмәк төрөү, тигәндән, ҡыҙыҡ, целлофан тоҡсайҙар күҙ-

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда коронавирус менән ауырығандар көндән-көн арта. Һуңғы тәүлектә генә 839 яңы осраҡ асыҡланған. Бөгөнгә 281 кеше, күпселеге оло йәштәгеләр - стационарҙа, 4463 кеше өйҙәрендә дауалана. Бер тәүлектә республикала коронавирустан өс үлем осрағы теркәлгән. Дауахананан тыш пневмония менән бер тәүлектә 18 кеше ауырығаны асыҡланған.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙә республиканың хәрби хеҙмәткәрҙәре менән эш итеү мәсьәләләре буйынса йәмәғәт башланғысында эшләгән кәңәшселәре исемлеген баҫтырып сығарҙы. Улар - кесе сержант Замир Йәнтүрин (Өфө), ефрейтор Евгений Гончаров (Һарытау), рядовойҙар Юрий Орда (Пенза) һәм Рафаэль Сатаев (Вольск), прапорщик Артур Мусакалимов (Елань). Радий Хәбиров билдәләүенсә, республика кәңәшселәр аша өлөшләтә мобилизация сиктәрендә саҡырылғандар менән бәйләнеш тота.

✓Рәсәй Федерацияһының Дәүләт Думаһы спикеры Вячеслав Володин телеграм-каналда Луганск һәм Донецк Халыҡ Республикаларының, Херсон һәм Запорожье өлкәләренең Рәсәй составына инеүе хаҡында референдумдарҙың яҡынса һөҙөмтәләрен хәбәр итте. Луганск Халыҡ Республикаһында халыҡтың - 98,42 проценты, Донецк Халыҡ Республикаһында - 99,23 проценты, Херсонда - 87,05 проценты, Запорожьела 93,11 проценты Рәсәй составына инеү яҡлы. "Ҡабул ителгән ҡарар миллиондарса халыҡты геноцидтан ҡотҡара, бергәләп киләсәккә пландар ҡорорға мөмкинлек бирә", - тип яҙҙы Вячеслав Володин.

✓Ил Президенты Владимир Путин указына ярашлы, дәүләт хеҙмәткәрҙәренең айлыҡ хеҙмәт хаҡы 1 октябрҙән 1,04 тапҡырға арттырыла. Документ рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында баҫылып сыҡты. "Федераль дәүләт граждан хеҙмәткәрҙәренең улар биләгән вазифаларға һәм РФ дәүләт граждан хеҙмәтенең класлы дәрәжәләренә ярашлы айлыҡ хеҙмәт хаҡы күләмен арттырырға", - тип яҙылған.

✓Башҡортостанда ауыл мәктәптәренән 25 йәш уҡытыусыға 690 мең һум күләмендә грант ярҙамы күрһәтелә. Башҡортостандың рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында Хөкүмәттең ауыл ерендә эшләгән йәш уҡытыусыларға гранттар биреү тураһында тейешле ҡарары баҫылған.

ҠЫҪҠАСА

# ЯҠТЫКҮЛ ТАҘАРЫРМЫ?

**Әбйәлил районында урынлашҡан Яҡтыкүл ауылында таҙартыу ҡоролмалары яңыртылған, тип хәбәр итә Торлаҡ-коммуналь хужалыкты үҙгәртеп ҡороуға булышлыҡ итеү ҮҘӘ.** Проект урындағы халыҡҡа һыуҙы бер туҡтауһыҙ һәм сифатлы сиктә еҫәреү системаһы менән ҡулланыу мөмкинлеге бирҙе. "Яҡтыкүл курорт зонаһы үсешенә бәйле элекке таҙартыу ҡоролмалары тулы көскә эшләй ине. Йәй һәм ҡыш осоронда 700 кубометрға тәғәйенләнгән объектҡа тәүлегенә 1,4 мең кубометр күләмендә һыу сығарырға тура килде. Шул уҡ ваҡытта уларҙың 95 проценты оҙаҡ ҡулланыуҙан туҙған. Шуға күрә бында тәүлегенә 1,4 кубометр һыу сығарған канализацияны таҙартыу ҡоролмалары теҙмәһе яңыртып төҙөлдө", - тип аңлаттылар ведомствонан. Бынан тыш, ҡоролмаларҙы яңыртыу яҡын-тирәләге йылғаларҙы зарарлы матдәләр тупланыуынан нормаға тиклем таҙартырға булышлыҡ иткән.

✔ **Башҡортостанда ата-әсәһе ҡарауынан ҡалған һәм етем 23 йәшлек балалар торлаҡ һатып алыуға сертификаттар аласаҡ. Был турала Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа закон ҡабул ителде.** "Сертификаттың өҫтөнлөгө - ирек биреүҙә. Кеше республиканың теләһә ҡайһы ҡала йәки районында урынлашҡан торлаҡты һайлап ала һәм үҙ аҡсаһын йәки Әсәлек капиталын ҡушып, льготалы ипотека алыпмы, закон буйынса уға тәғәйенләнгән майҙандан ҙурыраҡ фатир һатып алырға мөмкин", - ти Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев. Сертификат алыу өсөн һуңғы 6 айҙа хеҙмәт килешеүе буйынса эшкә урынлашыу йәки 1 йыл дауамында шәхси эшҡыуар, үҙмәшғүл булып теркәлеү талап ителә. Шулай уҡ был кеше наркология диспансерында иҫәптә тормаҫҡа тейеш. Әйткәндәй, социаль түләү ошо уҡ категорияға ингән көндәҙгө бүлектә белем алған йәки инвалид бала тәрбиәләгән кешеләргә лә ҡағыла. Унын күләмен ҡала йәки районда торлаҡтың квадрат метрына Башҡортостан Төҙөлөш министрлығы тарафынан билдәләнгән уртаса баҙар хаҡы һәм дөйөм майҙандың 33 квадрат метрынан сығып иҫәпләйәсәктәр.

✔ **Уңайлы ҡала мөхите булдырыу өсөн Башҡортостан проекттарына 724 млн һум йүнәлтелгән. Был турала республиканың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры вазифаһын башҡарыусы Ирина Голованова хәбәр итте.** Былтыр уңайлы ҡала мөхите булдырыу буйынса Бөтә Рәсәй конкурсында республиканан 8 проект еңеп сыҡҡан. "Былтыр уларҙы бойомға ашырыу маҡсатында федераль бюджеттан 520 млн һум йүнәлтелгән, быйыл илдең резерв фондынан тағы 204 млн һум күсерелде. Бөтә эштәр 2022 йылдың 30 октябренә тамамланасаҡ", - тине еткәсе. Улар араһында Баймаҡ, Дәүләкән, Белорет, Учалы, Благовещен, Сибай ҡалаларында, Йылайыр һәм Воскресенск ауылдарында бойомға ашырылған проекттар бар. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров территорияларҙы төҙөкләндереү эштәрен ваҡытында тамамларға һәм яңы объекттар буйынса эш башларға ҡушты. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, быйыл республиканың 4 ҡалаһы - Ишембай, Янаул, Ағиҙел, Дүртөйлө был конкуста еңеп сыҡты. Улар дөйөм 335 млн һум федераль ярҙам аласаҡ.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БАЛАЛАР ДОНЪЯ КҮРҺЕН!



**Башҡортостан - Рәсәйҙең мәктәп туризмы программаһы башланған пилот төбәктәренең береһе. Республика етәксеһе Радий Хәбиров үҙенең телеграм-каналында уны тормошҡа ашырыу, уҡыусыларҙың тәүге сәфәрҙәре хаҡында яҙып сыҡты.**

"Тәүге сәфәрҙәр ойошторолдо, тәьҫораттар яҡшы. Нуриман, Благовещен, Миәкә, Салауат - балаларҙың бер өлөшө был районарҙы беренсегә күрҙе. Улар ир-егеттәр монастырына, Павловка һыуһаҡлағысына, Ҡыҙыл Шишмәгә һәм башҡа күркәм урындарға барҙы", - тип яҙҙы Радий Хәбиров.

Уҡыусыларҙың сәйәхәтен ойоштороу өсөн "Туризм һәм ҡунаҡсыллыҡ индустрияһы" милли проекты буйынса Башҡортостанға федераль бюджеттан 55,5 миллион һум бүленде, тип билдәләне республика Башлығы. Ә республика ҡаҙнаһынан 22,2 миллион һум йүнәлтелде. Артабан ул балалар өсөн сәфәрҙе нисек ойошторорға кәрәклеген дә иҫкә төшөрҙө. "Ғаризаны мәктәп һәм район мәғариф бүлеге әҙерләй. Ҡатнашыусылар - 5-се, 9-сы класс уҡыусылары. Көндә, ваҡытты һәм маршрутты һайларға мөмкин. Сәфәрҙәр яҡшы ойошторолған, улар ике көнлөк, уҡыусылар өсөн бушлай. Беҙ берҙәм федераль реестрға ингән республика туроператорҙарын йәлеп иттек", - тип билдәләне республика етәксеһе.

Сәйәхәттәр буйынса өҫтәмә мәғлүмәтте эш көндәрендә (347) 218-17-20 телефоны буйынса Башҡортостан Республикаһы Эшҡыуарлыҡ һәм туризм министрлығының туризм программаларын тормошҡа ашырыу бүлегендә алырға мөмкин.

# КЕМ ТҮЛӘЙ, КЕМ ТҮЛӘМӘЙ?



**Сентябрҙә Башҡортостан парламенты депутаттары капиталь ремонт өсөн түләүҙәр буйынса льготалар тураһында закон ҡабул итергә йыйына, тип хәбәр иттеләр төбәк Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың матбуғат хеҙмәтенән.**

Республика Ҡоролтайының Торлаҡ сәйәсәте һәм инфраструктура үсеше комитеты "Республика биләмәһендә урынлашҡан күп фатирлы йорттарҙағы дөйөм милеккә капиталь ремонт үткәреүҙе ойоштороу тураһында" Башҡортостан Республикаһы законына үҙгәрештәр индереү тураһында" закон проектын хупланы. Профилле комитет документты парламенттың киләһе пленар ултырышында аҙаҡҡы уҡыуҙа ҡабул итергә тәҡдим итте. "Закон проекты граждандарҙың айырым категориялары өсөн капиталь ремонтҡа иғәнә түләүгә льготаларҙың ғәмәлдә булыу ваҡытын оҙайтырға тигән тәҡдим индерҙе, - тине Башҡортостан парламенты спикеры. - 70 йәштән өлкәндәргә - капиталь ремонт өсөн иғәнә суммаһының 50 проценты, 80 йәште уҙғандарға 100 проценты компенсациялана".

Льгота айырым йәки эшләмәгән пенсионерҙарҙан йә иһә I-II төркөм инвалидтарынан торған ғаиләлә йәшәгән, эшләмәгән пенсионерҙарға бирелә. Ғәмәлдәге ҡануниәтҡә ярашлы, 2022 йылда бындай социаль ярҙам күрһәтеү ваҡыты тамамлана. Уны йәнә ике йылға - 2024 йылдың аҙағына тиклем оҙайтырға тәҡдим ителә. Республика ҡаҙнаһынан ошо законды бойомға ашырыу өсөн 2023 йылда - 40,3 миллион, 2024 йылда 44,9 миллион һум бүлеү планлаштырыла.

# РӨХСӘТҺЕҘ АЛДЫҢМЫ?



**Республика депутаттары металл һыныҡтарын законһыҙ йыйған өсөн 400 мең һумға тиклем штраф индерергә тәҡдим итә.**

Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы "Рәсәй Федерацияһының Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында кодексына үҙгәрештәр индереү тураһында" федераль закон проектын Дәүләт Думаһына индерергә йыйына. Унда ҡара һәм төҫлө металл һыныҡтарын әҙерләү, һаҡлау, эшкәртеү һәм һатыу буйынса законһыҙ эшмәкәрлеккә административ хоҡуҡ боҙоуҙың айырым составына индерергә һәм штраф һалырға тәҡдим ителә.

Документтың тексына ярашлы, шәхси эшҡыуарҙарға - 30 мең һум, юридик берәмектәргә 200 мең һум штраф ҡаралған. Закон проекты административ хоҡуҡ боҙоу ҡоралдарын йәки предметтарын тартып алыу мөмкинлеген күҙ уңында тота. Законды ҡабаттан боҙған өсөн штрафтың суммаһы шәхси эшҡыуарҙарға - 50 мең һумға, юридик берәмектәргә 400 мең һумға ҡәҙәр арта йәки 90 тәүлеккә тиклем эшмәкәрлекте административ туҡтатып тора. Лицензияға эйә булғандар, ләкин уның шарттарын боҙғандар өсөн дә санкциялар ҡаралған. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев фекеренсә, закон проекты рөхсәтһеҙ металл һыныҡтарын ҡабул иткән пункттар һанын кәметергә, экологияны һаҡларға ярҙам итергә тейеш.

# ҮҘМӘШҒҮЛДӘР ҺӘМ КӘСЕПСЕЛӘРГӘ...



**Башҡортостанда 118 төр халыҡ художество кәсептәре оҫталарының сығымдары дәүләт тарафынан компенсацияланасаҡ. Субсидия күләме үҙмәшғүлдәр өсөн 500 мең һум булһа, бәләкәй һәм урта бизнес субъекттары өсөн 700 мең һум тәшкил итәсәк.**

"Ҡабул ителгән һәм планлаштырылған саралар кәсепселекте тулыһынса легалләштереүгә һәм оҫталарҙың федераль, төбәк кимәлендә ярҙам сараларын ҡуллана алыуына килтерергә тейеш", - ти эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры Рөстәм Афзалов.

Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров ярҙам сараларының һөҙөмтәле булырға тейешлеген, йәғни кәсепселәргә нисек ярҙам итеүен, талап ителгән үҙгәртеүҙәр индереү, күләмде күпмегә арттырыу кәрәклеген асыҡлауҙы, шулай уҡ ғүмерен ошо эшкә бағышлаусылар үҙҙәрен уңайлы тойһон өсөн тармаҡ эшмәкәрлеген хоҡуҡи көйләүҙә камиллаштырыу зарурлығын билдәрҙе. Шулай уҡ ул дәүләттең торлаҡ булмаған фондын кәсепселек предприятиелары өсөн күргәҙмәләр, йәрминкәләр, бизнес-мәктәптәр, вебинарҙар, семинарҙар һәм халыҡ художество кәсепселеген үҫтереүгә ярҙам иткән башҡа мөмкинлектәр өсөн ҡулланыуҙы анализларға ҡушты, сөнки кәсепселәр һәм ҡул эше оҫталарының барыһы ла үҙ тауарын һата, уны тәҡдим итә алмай, маркетинг белеменә эйә түгел. "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған халыҡ художество кәсептәре эшмәкәре" маҡтаулы исемен булдырыу буйынса тәҡдимдәр индерегеҙ. Минеҫсә, был үҫеш өсөн этәргес, иң мөһиме - граждандарҙың мөһим эшмәкәрлегенә дәүләттең юғары баһаһы булыр", - тине Андрей Назаров.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔Һуңғы осорҙа илдең төрлө төбәктәрендә мәғариф ойошмаларына ҡоралды һөжүм итеүҙәр, шартлатҡыс ҡоролмалар һалыныуы тураһында хәбәр итеүҙәр йышайыуға бәйле, Өфө мэры Ратмир Мәүлиев бөтә мәктәптәрҙең ҡоймаларын тикшереп сығырға һәм уларҙы аша үтерлек юлдарҙы ябырға ҡушты. Етәксе шулай уҡ бинаға ингән яҡтағы бүлмәләргә өҫтәмә тревога биреү төймәләрен урынлаштырыу башланғысын да хупланы. Әлеге көндә Өфөлә 393 муниципаль белем биреү ойошмаһы бар, уларҙа һаҡсылар тәүлек әйләнәһенә эшләй, видеокүҙәтеү, инеүҙе контролдә тотоу һәм тревога биреү төймәләре эшләй.

✔Ҡала округы Советының сираттағы ултырышында бюджет процесы тураһындағы положение һәм ерҙе файҙаланыу һәм төҙөлөш ҡағиҙәләре тураһындағы мөһим мәсьәләләр ҡаралды. Шулай уҡ баш ҡала тағы бер "Почетлы граждан"ға артты - был абруйлы исемгә Башҡорт АССР-ының һәм Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған һөнәри-техник белем биреү уҡытыусыһы, Нуғай, Зинин һәм Жилин ҡасабаларының Ветерандар советы рәйесе Виктор Резяпов лайыҡ булды.

✔Башҡортостанда "Мәктәп туризмы" федераль проекты бойомға ашырыла башланы, был турала Өфө хакимиәтенең мәҙәниәт һәм сәнғәт буйынса идаралығынан хәбәр иттеләр. "Ерем тарихы" туры сиктәрендә 26 сентябрҙә Өфө ҡалаһы тарихы музейын Мәсетле районынан 32 уҡыусы килеп ҡараған. Октябрь аҙағына тиклем "Мәктәп туризмы" сиктәрендә республиканың 11 мең 5-9 класс уҡыусылары ял итәсәк, тип көтөлә. Ғаризалар мәктәптәрҙән һәм район мәғариф бүлектәренән ҡабул ителә.

✔28 сентябрҙән Өфөлә Орджоникидзе районының 70 йыллығына арналған "Черниковка: тарих һулышы" тигән фотокүргәҙмә асылды. Ул 2022 йылдың 17 ноябренә тиклем Хәрби Дан музейында ойошторола. Күргәҙмә шишәмбенән йәкшәмбегә тиклем сәғәт иртәнге 11-ҙән киске 6-ға, йома көнө сәғәт төшкө икенән киске 9-ға тиклем эшләй. Килеүселәр район тарихының иң сағыу ваҡиғалары менән таныша ала.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

***✓ Өлөшләтә мобилизацияға эләгеүселәр эш командировкаһында йәки отпускыла булғанда, уға ҡайтыу кәрәкмәй. Әгәр мобилизация саралары артабан да дауам итһә, повестка һуңыраҡ тапшырыласаҡ.***



ҺОРАУ - ЯУАП

**Был көндәрҙә ығы-зығы, ваҡ мәшәҡәт икенсе планға күсте, һәр кемдең уйында һәм тормошонда бары тик бер мәсьәлә тәүге урында тора: ил Президенты иғлан иткән өлөшләтә мобилизацияға кемдәр эләгер, ниндәй ташламалар булыр һ.б.**

**Барлыҡ һорауҙарға теүәл һәм аныҡ яуап алыу маҡсатында 26 сентябрҙә Башҡортостан юлдаш телевидениеһында Башҡортостан Республикаһының хәрби комиссары Михаил Блажевич һәм башҡа министрлыҡтар, финанс учреждениелары, етәкселәр ҡатнашлығында тура эфирҙа брифинг үтте. Тамашасылар унда тура эфирҙа ла һорауҙар бирә алды.**

**Бөгөн гәзит уҡыусыларға иң әһәмиәтле һәм кәрәкле һорауҙарға бирелгән яуаптарҙы тәҡдим итәбеҙ.**

# ҺӘР КЕМДЕ БОРСОЙ...



**➔ Кемдәр саҡырыла?**

Тәү сиратта, 35 йәшкә тиклемге, әрме хеҙмәтен үткән, бигерәк тә хәрби тәжрибәһе булған, хәрби-иҫәп специальностарына (уҡсы, танкист, артиллерист, водитель, механик-водитель) эйә граждандар (рядовой һәм сержанттар) саҡырыла. Шулай уҡ 45 йәшкә тиклемге һирәк һөнәргә эйә булыусылар йәки ирекмәндәр саҡырылыуы мөмкин. 50 йәшкә тиклем кесе офицерҙар, 55 йәшкә тиклем өлкән офицерҙар алына. Барлыҡ мобилизацияланған күләмдең 30 процентын ирекмәндәр тәшкил итә. Шулай уҡ өлөшләтә мобилизация ваҡытында табиптар ҙа саҡырылырға мөмкин, сөнки уларҙың һөнәре хәрби-иҫәп исемлегенә инә.

Әйткәндәй, ҡатын-ҡыҙ мобилизация буйынса саҡырылмай. Әммә әгәр һөнәре хәрби-иҫәп специальносына тура килһә, улар контракт хеҙмәтенә бара ала. Контракт буйынса хеҙмәт итеүсе ҡатын-ҡыҙ, нигеҙҙә, табиптар.

**➔ Кемдәргә кисектереү бирелә?**

- Оборона-сәнәғәт комплексы ойошмалары (Башҡортостанда - 14 оборона-сәнәғәт комплексы структураһына ингән предприятие, мобилизация бурысын башҡарған 30 предприятие бар) хеҙмәткәрҙәре;

- бронь алғандар, йәғни предприятиелар, ойошмалар һәм учреждениеларға беркетелгәндәр (был хаҡта мәғлүмәтте кадрҙар бүлегенән алырға мөмкин);

- һаулыҡ торошо буйынса ваҡытлыса хәрби хеҙмәткә яраҡһыҙ тип танылғандар - алты айға тиклем;

- медик-социаль экспертиза һөҙөмтәһе нигеҙендә даими тәрбиәгә мохтаж йәки I төркөм инвалид булған (һәм закон буйынса уларҙы тәрбиәләргә тейешле башҡа кеше юҡ икән) атаһын, әсәһен, ҡатынын, ирен, бер туған ағаһын йәки апаһын, олатаһын, өләсәһен даими ҡарағандар;

- балиғ булмаған бер туған энеһен һәм (йәки) һеңлеһен ҡараған опекундар йәки попечителдәр; - ҡарауында 16 йәшкә тиклемге дүрт һәм унан күберәк балаһы булғандар;

- әсәйһеҙ бер бала йәки 16 йәшкә тиклемге балалар тәрбиәләгәндәр;

- 16 йәшкә тиклемге өс балаһы һәм ҡатыны йөклө (мөҙҙәт - 22 аҙнанан кәм түгел) булғандар;

- 8 йәшкә тиклемге дүрт һәм унан күберәк туғандары булғандар, шул уҡ ваҡытта әсә кеше уларҙы иренән башҡа тәрбиәләһә;

- Федерация Советы ағзалары һәм Дәүләт Думаһы депутаттары;

- дәүләт аккредитацияһы булған ссуз һәм вуздарҙа, шул иҫәптән бакалавриат, магистратура, специалитет, аспирантурала (аспиранттар өсөн үҙгәрештәр индерелеүе лә ихтимал) беренсел белем алыусылар. Дәүләттеке булмаған ссуздар һәм вуздар студенттары өсөн кисектереү юҡ.

**➔ Командировканы йәки отпускыны өҙөргәме?**

Өлөшләтә мобилизацияға эләгеүселәр эш командировкаһында йәки отпускыла булғанда, уға командировкаһын йәки отпускыһын өҙөп ҡайтыу кәрәкмәй. Әгәр мобилизация саралары артабан да дауам итһә, повестка һуңыраҡ тапшырыласаҡ. Әгәр гражданин повестканы ҡайҙалыр юлланыу алдынан алһа, уға мотлаҡ хәрби комиссариатҡа комиссия ултырышына килергә кәрәк.

**➔ Повестка сирләгәндә килһә?**

Гражданинға эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙы асылғанда, ул повестка алғас, сирләүе хаҡында хәрби комиссариатҡа хәбәр итергә тейеш. Дауаланып бөткәндән һуң, һауыҡҡас, хәрби комиссариатҡа килә, әммә сирләүен раҫлау өсөн эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙын, справка йәки выписка килтерергә тейеш.

**➔ Эш урыны һаҡланамы?**

Теге йәки был ойошма-предприятиела эшләп йөрөүсе мобилизация буйынса саҡырылғанда, уның эш урыны һаҡлана, хеҙмәт килешеүе өҙөлмәй, ә етәксе бойороғо менән ваҡытлыса туҡтатылып тора. Бының өсөн мобилизацияланыусы кадрҙар бүлегенә повесткаһының күсермәһен бирергә һәм документтар тейешенсә тултырылырға тейеш. Мобилизацияланған хеҙмәткәргә ошо көнгә тиклем эш хаҡын һәм файҙаланылмаған отпуск өсөн компенсация түләнә. Мобилизацияланған хеҙмәткәр урынына ваҡытлыса икенсе хеҙмәткәр алырға мөмкиндәр. Тағы ла: мобилизация ваҡыты граждандың хеҙмәт стажына индерелә.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ЙЫЛЫНАБЫҘ!

**Өфөлә 27 сентябрҙә йылытыу миҙгеле башланды. Ҡала мэры Ратмир Мәүлиев ошо хаҡтағы ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Документ донъя күреү менән халыҡта бигерәк тә сентябрь өсөн түләүҙәр буйынса бик күп һорау тыуҙы. Шуға күрә түбәндәге аңлатманы биреүҙе кәрәк тип һананыҡ.**

Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, торлаҡ һәм торлаҡ булмаған биналарҙа йылылыҡ өсөн түләү күләме билдәләнә һәм барлыҡ йорттар ике төргә бүленә. Беренсеһе - йылылыҡты иҫәпкә алыусы дөйөм йорт ҡорамалы ҡуйылған йорт. Был осраҡта түләү уның күрһәткесе - факт буйынса башҡарыла. Йәйгеһен түләүҙәр юҡ. Иҫәп ҡорамалы күрһәткесе һәр ай 23-нән 24-нә ҡараған төндә алынасаҡ. Тимәк, сентябрҙең өс көнө октябрь өсөн алынған осор күрһәткесенә инәсәк. Квитанция 1 ноябргә тиклем биреләсәк. Икенсе төр - йылылыҡты иҫәпкә алыусы дөйөм йорт ҡорамалы булмаған йорттар. Уларҙа иҫәп норматив буйынса алына. Норматив буйынса түләү йылытыу миҙгеленең оҙайлығына бәйле түгел: граждандар һигеҙ ай дауамында ай һайын бер төрлө сумма түләй. Норматив буйынса түләү йылытыу миҙгеленең башынан башлана. Быйыл йылылыҡ сентябрҙә бирелде, шуға күрә түләү ҙә сентябрҙән башлана. Норматив тулы ай өсөн иҫәпләнә, йылылыҡ бирелгән көндән алып фактик көндәргә бүленмәй. Норматив буйынса түләгән йорттарҙа йылылыҡ өсөн квитанцияны 1 октябргә тиклем аласаҡтар. Шул уҡ ваҡытта, әгәр йылылыҡты 15 майҙа туҡтатһалар, түләү өсөн иҫәп ҡағыҙҙары бары тик апрелгә тиклем генә биреләсәк (һигеҙ айға ғына). Майҙа квитанциялар булмаясаҡ.

# ЙЫЛ ДАУАМЫНДА УҠЫ!

**Баш ҡалала үткән "Уҡы 365" фестивале яҙыусыларҙы һәм уларҙың ижады менән ҡыҙыҡһыныусыларҙы берләштерҙе.**

Тәбрикләү һүҙе менән Ә. Вәлиди исемендәге Милли китапхана директоры Марат Зөлҡәрнәйев сығыш яһаны һәм байрамды ойоштороусы Башҡортостан Китапханалар ассоциацияһына рәхмәт белдерҙе. Фестивалгә Мәскәүҙән, Санкт-Петербургтан ҡунаҡтар - прозаик, тәнҡитсе Александр Евсюков, шағир, тәржемәсе, эссе яҙыусы, әҙәбиәт белгесе Кира Османова, шағир, тәнҡитсе, тәржемәсе, мөхәррир, сәнғәтте тикшереүсе Роман Круглов килде. Башҡортостандың халыҡ шағиры Ҡәҙим Аралбаев сараға килгән йәш яҙыусыларҙы "Беҙҙең заман сапҡындары" тип атаны һәм улар хөрмәтенә "Сапҡын" шиғырын уҡыны. Байрамда ҡатнашыусылар өсөн бер нисә, шул иҫәптән балалар һәм үҫмерҙәр өсөн майҙансыҡ эшләне, уларҙа оҫталыҡ дәрестәре, йәрминкә-сауҙа, китап күргәҙмәләре, әҙәби әҫәрҙәр персонаждары менән осрашыу, викториналар ойошторолдо. Фестиваль сиктәрендә Башҡортостан һәм Рәсәй яҙыусылары һәм шағирҙары, китапхана белгестәре, уҡыу ирекмәндәре ҡатнашлығында "Заманса донъяла уҡыуҙы алға һөрөү" тигән түңәрәк ҡор үтте. Ҡатнашыусылар халыҡта китап уҡыуға ҡыҙыҡһыныуҙың кәмеүе, милли әҙәбиәтте рус теленә тәржемә итеү, әҙәбиәтте популярлаштырыу ысулдары проблемалары буйынса фекер алышты.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йөрәк

❖ Йөрәк эшмәкәрлеген яҡшыртыу маҡсатында түбәндәге ике төрлө дауаны эшләп ҡулланырға мөмкин. Тәүҙә 500 грамм бал (май айыныҡы булһа, яҡшыраҡ) һәм 500 грамм 40 процентлы араҡыны ҡушырға, талғын утта йылытырға. Йылытҡан саҡта ҡатышманың өҫтөнә аҡ ҡына күбек сыҡҡансы болғатып торорға. Шунан утты һүндереп, ситкә ҡуйып торорға. Икенсе дауа өсөн бер тигеҙ өлөштә алынған семтем шифалы ромашка, күгүлән (спорыш), ваҡланған валериана тамыры, кипкәр (сушеница болотная), арыҫлан ҡойроғо (пустырник) үләндәрен ҡушып, өҫтөнә 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға һәм 1 сәғәт төнәтергә. Шунан бер нисә ҡат марля аша һөҙөргә. Ике дауа ла шулай әҙер булғас, бергә ҡушырға һәм 3 көн ҡараңғы урында тоторға. Дауаланғандың беренсе аҙнаһында төнәтмәне иртәнсәк һәм кис ашарҙан алда 1-әр балғалаҡ эсергә. Икенсе аҙнала шулай уҡ иртәле-кисле 1-әр ҡалаҡ эсә башларға. Төнәтмәне эсеп бөткәс, 7-10 көнгә туҡталып торорға. Шунан тағы ла әҙерләп алып, дауаланыуҙы ошо рәүешле дауам итергә. Дауаланыу курсы - бер йыл. Баштараҡ һөҙөмтәһе һиҙелмәгән кеүек булһа ла, был ысул ҡан баҫымы күтәрелеүе, йөрәк ишемияһы, стенокардия, атеросклероз ауырыуҙарын дауалауҙа бик файҙалы.

### Табандар ярылһа

❖ Табандар бөйөр ауырыуҙары сәбәпле ярылыуы ихтимал, тип иҫәпләй имселәр. Шуға тәү сиратта бөйөрҙәрҙе таҙартыу кәрәк. Бының өсөн 1 литрлыҡ банканы йыуырға һәм киптерергә. Шуның өҫтән бер өлөшөнә ваҡланған пихта ҡайырын һалырға, өҫтөнә сыҡҡансы һыу ҡойорға һәм һыу быуында тоторға (банканан ҙурыраҡ һауытҡа һыу ҡойоп, шуның эсенә ҡуйырға). Ҡайнар хәлгә еткерергә һәм 1 сәғәткә талғын утта ҡалдырырға. Шунан һөҙөргә. Был дауаны көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 50-шәр мл эсергә. Уны һыуытҡыста һаҡларға, әммә ҡулланырҙан алда мотлаҡ йылытып алырға. Бөйөрҙәр таҙарына барған һайын, табандар ҙа ярылыуҙан туҡтай.

**Ғәлиә ШӘМСЕТДИНОВА әҙерләне.**

*✓ Түбәндәге әйберҙәрҙе алыу ҡамасауламаҫ: шәхси гигиена әйберҙәре, дарыуҙар, фонарик, мультитул, термобелье, балаклава, тактик бирсәткәләр, ултыра торған ҡулайлама, теплоидтар, батарейкалар, төймәле телефон.*



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# АҒАС ҺАУЫТ-ҺАБА

Формаһы буйынса бик үҙенсәлекле ҡымыҙ туҫтағы Ырымбур төбәк тарихи-крайҙы өйрәнеү музейында һаҡланып ҡалған. Уның диаметры 10 сантиметрҙан саҡ ҡына оҙонораҡ, ситтәренең бейеклеге уртаһы тирәһендә 3 сантиметр. Йайлап ҡына күтәрелә барып, ситтәре 9 сантиметрлыҡ ике һырлы тотҡа барлыҡҡа килә, улар 15 түңәрәк дүңгәләктән торған сылбыр менән тоташҡан, урталағыһы башҡаларынан ҙурыраҡ. Уларҙы быға тиклем һүрәтләнгән һуңғы төркөм ижауҙар кеүек һырлағандар. Туҫтаҡ ҡабарынҡы һыҙаттар ярҙамында биҙәлгән. Төбөндә дүрт сығынтыһы бар.



*Ҡымыҙ өсөн туҫтаҡ.*
*Ырымбур төбәк музейы фондынан.*
*Ф.И. Вакар фотоһы*

Санкт-Петербургтағы Рәсәй этнография музейында һаҡланған ҡара көрән төҫтәге лакланған туҫтаҡ тыш яҡтан бик зауыҡлы ҡабарынҡы һырҙар менән биҙәлгән, дүрт тояғы бар. Тулҡын һымаҡ үрелеп киткән ҡабарынҡы үҫемлек һабаҡтары һәм уларҙан ситтәрәк торған япраҡтар рәүешендәге биҙәк башҡа ағас әйберҙәрҙә осрамай, әммә ул боронғо күн әйберҙәрҙе һәм метал биҙәүестәрҙе орнаментлауға хас. Был туҫтаҡ музейға 1923 йылда Мәскәү ҡалаһында үткән Башҡорт автономиялы республикаһының 5 йыллыҡ юбилейына арналған күргәҙмәнән һуң барып эләккән.



*Ҡымыҙ туҫтағы. РЭМ фондынан.*
*Рәссамы В.М. Шутова.*



*Ҡымыҙ өсөн туҫтаҡ. Ырымбур төбәк музейы фондынан. Рәссамы В.М. Шутова*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

ҺОРАУ - ЯУАП

# ҺӘР КЕМДЕ БОРСОЙ...

(Башы 5-се биттә).



**➔ Мобилизация үткәндәр ҡайҙа күнекмә үтә?**

Резервта булыусылар Пенза, Һарытау, Ҡаҙан, Елань, Вольск ҡалаларында уҡыу үҙәктәрендә һәм хәрби училищелар базаһында бер ай тирәһе уҡыу-күнекмә үтә.

**➔ Ваҡытлы хеҙмәттән - контракт хеҙмәтенә**

Саҡырылыусылар мобилизацияланғандан һуң 3 ай үткәс, ваҡытлы хеҙмәттән контракт хеҙмәтенә күсә ала. Был осраҡта уларға эш хаҡы түләнә. Эш хаҡын ниндәй иҫәпкә күсереү тураһындағы мәсьәләне контракты үҙе хәл итә.

**➔ Бер тапҡыр бирелгән түләү**

Әлеге ваҡытта РФ Дәүләт Думаһында мобилизация үткән граждандарға бер тапҡыр 300 мең һум биреү тураһында закон проекты ҡарала.

**➔ Мобилизация үтеүсенең ғаиләһенә ярҙам**

Әгәр ғаиләлә матди ҡыйынлыҡтар килеп тыуһа, урындағы социаль яҡлау хеҙмәтенә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Һәр муниципалитетта ғаилә хеҙмәте бар һәм улар урынға сығып, хәл-торошто баһалап, компетентлы органдарҙы йәлеп итеп ярҙам күрһәтәсәк.

**➔ Банктарға түләү**

Өлөшләтә мобилизация буйынса хәрби хеҙмәткә саҡырылғандар кредит түләүҙәре буйынса кисектереү (шулай уҡ түләү күләмен кәметеү) алырға хоҡуҡлы. Бынан тыш, финанс ойошмаларына түләү ваҡытын һуҙған өсөн штраф һәм пеня түләүҙәрен ҡулланмаҫҡа, түләнмәгән сумманы тартып алыу эшен башламаҫҡа, алдан түләү талап итмәҫкә тәҡдим ителә.

**➔ Нимә алырға?**

Мобилизация үткән граждандарға үҙҙәре менән 1 тәүлеккә етерлек бөтә нәмә алырға мөмкин. Һауа торошона ҡарап кейенергә, йылы әйберҙәр алырға рөхсәт ителә, уларҙы тейешле урынға барып еткәс, посылка менән өйгә һалырға була. Призыв буйынса саҡырылыусылар кәрәкле кейем менән тәьмин ителәсәк. Дарыуҙарға килгәндә инде, кәрәкле дарыуҙар алырға мөмкин. Хәрби часҡа барып еткәс, мобилизацияланғандар тулы, шул иҫәптән медицина йәһәтенән дә, тәьминәткә күсәсәк.

Шул уҡ ваҡытта, әгәр мөмкинлек һәм теләк булғанда, түбәндәге әйберҙәрҙе алыу ҙа ҡамасауламаҫ: шәхси гигиена әйберҙәре, дарыуҙар, фонарик, мультитул (күп функциялы бәке), термобелье, балаклава (подшлемник), тактик бирсәткәләр, походта ултыра торған ҡулайлама, теплоидтар (химик йылытҡыс), төрлө батарейкалар, төймәле телефон.

**➔ Заманса телефондар кәрәкме?**

Хәрби хеҙмәткәрҙәргә смартфондар йөрөтөү тыйыла. Бары тик интернетҡа сығыу мөмкинлеге булмаған төймәле телефондар ғына рөхсәт ителә, сөнки хәрби хәрәкәттәр шарттарында киң мультимедиа мөмкинлеге булған гаджеттар кире эҙемтәгә килтереүе мөмкин.

**➔ Повестканы кем килтерә?**

Повестканы хәрби комиссариат хеҙмәткәрҙәре генә түгел, йәлеп ителгән башҡа хеҙмәт вәкилдәре лә килтерергә мөмкин. Әммә документ мотлаҡ призывниктың ҡулына тапшырылырға тейеш. Шулай уҡ телефон, интернет аша мобилизация алып барылмай.

**➔ Ситтә эшләүселәр**

Эш йәки уҡыу буйынса өс айҙан оҙаҡҡа ситкә сығыусылар барған урында ваҡытлыса иҫәпкә торорға тейеш.

**➔ Призывтан ҡасыусылар**

Иғлан ителгән өлөшләтә мобилизация сиктәрендә саҡырыуҙан ҡасып ҡалған граждандарға ҡануниәт буйынса яза ҡарала. Саҡырыу буйынса хәрби комиссариатҡа килмәгән осраҡта, Енәйәт кодексында 7 йылға тиклем иректән мәхрүм итеү ҡаралған.

**➔ Түләүҙәр һәм льготалар**

Мобилизация буйынса хәрби хеҙмәткә саҡырылыусылар контракт буйынса хеҙмәт итеүселәргә тиңләштерелә һәм уларға ла шундай уҡ льготалар, страховка түләүҙәре, эш хаҡы ҡаралған. Махсус операция барған урынға эләккәс, аҡсалата түләүҙәр һиҙелерлек арта. Әүҙем хәрби хәрәкәттәр алып барғанда айына 200-300 мең һум түләү алырға мөмкин.

**➔ Әрме хеҙмәтенән ҡайтыусылар**

Ваҡытлы хәрби хеҙмәттән быйыл яҙғыһын ҡайтыусылар, әгәр һирәк һөнәргә эйә булһалар, өлөшләтә мобилизация барышында ҡабат саҡырылырға мөмкин. Әммә көҙөн ҡайтыусыларға әлегә повестка бирелмәйәсәк.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Рәсәйҙә өлөшләтә мобилизация буйынса тура бәйләнеш эшләй. Стационар телефондан 122 номерына шылтыратып, белергә теләгән һорауҙарығыҙға яуап алырға мөмкин.**

**Шулай уҡ Бөтә Рәсәй халыҡ фронтының барлыҡ субъекттарҙағы бүлексәләрендә хеҙмәткә яңылышлыҡ буйынса саҡырылғандарға ярҙам итеү үҙәге эшләй. Башҡортостанда ул Киров, урамы, 1 адресы буйынса 138-се бүлмәлә урынлашҡан. Телефон: 8 (347) 273-55-44. Һорауҙарҙы шулай уҡ бүлексәнең "Бәйләнештә" һәм "Синыфташтар" социаль селтәрҙәрендәге төркөмдәрендә яҙырға була.**

**Шулай уҡ социаль селтәрҙәрҙә "Аңлатабыҙ. Башҡортостан" төркөмө эшләй (мәҫәлән, vk.com/anlatabiz102), уларға ҡыҙыҡһындырған һорауҙар буйынса яҙып, яуаптар алырға мөмкин.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

● **Рәсәй Дәүләт Думаһы беренсе уҡыуҙа өлөшләтә мобилизация буйынса хәрби хеҙмәткә алыныусыларға кредит каникулдары биреү тураһында закон проектын ҡабул итте.** Был турала рәсми сайтта мәғлүмәт баҫылып сыҡты. Был хоҡуҡҡа улар ҡарамағында булған кешеләр ҙә эйә буласаҡ. "Заем алған кеше кредит биреүсегә хәрби хеҙмәт үтәгән осорҙа килешеү шарттарына бурыстарҙы ҡайтарыуҙы туҡтатып тороуҙы күҙаллаған үҙгәреш индереүҙе йәки ташламалы осорҙа түләүҙәр күләмен кәметеүҙе һорап мөрәжәғәт итә ала. Закон проекты мобилизацияланыусы вафат булған осраҡта кредит буйынса бурыстарҙы тулыһынса йәки өлөшләтә бөтөрөүҙе лә күҙаллай", - тигән аңлатма бирелә сайтта. Кредит түләүҙе килешеү ғәмәлдә булған теләһә ҡайһы ваҡытта кисектереп торорға мөмкин, әммә 2023 йылдың 31 декабренән дә һуң булмаҫҡа тейеш. Икенсе мөһим шарт - быға тиклем кисектереү мөмкинлеген файҙаланмаған булыу.

● **Дәүләт Думаһы депутаттары икенсе һәм өсөнсө уҡыуҙа РФ Хеҙмәт кодексына мобилизация буйынса хәрби хеҙмәткә алынған, запаста иҫәпләнгән һәм хәрби хеҙмәт тураһында контракт төҙөгән хеҙмәткәрҙәргә өҫтәмә гарантиялар биреүҙе күҙҙә тотҡан төҙәтмәләр индерҙе.** Был төҙәтмәләргә ярашлы, хеҙмәт килешеүе хәрби хеҙмәт тамамланғанға тиклем туҡтатылып тора. Быға тиклемге вазифаға хәрби хеҙмәт тамамланғандан һуң өс ай дауамында кире ҡайтырға мөмкин. Документҡа ярашлы, "хеҙмәт килешеүе ғәмәлен туҡтатып торған осор әлеге статьяға ярашлы хеҙмәткәрҙең эш стажына, шулай уҡ специальность буйынса эш стажына индерелә". Бынан тыш, мобилизацияланған һәм үҙ ирке менән юлланған граждандарҙың ғаилә ағзалары өсөн өҫтәмә гарантиялар ҡаралған. "Уларҙы үҙ ризалығынан тыш эш буйынса командировкаларға ебәреү, эш сәғәтенән тыш, төнөн, ял һәм байрам көндәрендә эшкә сығарыу кеүек айырым эш режимына йәлеп итеп булмаясаҡ. Шулай уҡ штатты ҡыҫҡартҡан осраҡта улар эш урынын һаҡлап ҡалыуға өҫтөнлөклө хоҡуҡҡа эйә буласаҡ", - тип аңлатты төҙәтмәләрҙең авторҙашы, Хеҙмәт, социаль сәйәсәт һәм ветерандар эше буйынса комитет рәйесе Ярослав Нилов.

● **Шундай уҡ төҙәтмәләр "РФ дәүләт граждандар хеҙмәте тураһындағы" федераль законға ла индерелгән.** Ул Хеҙмәт кодексы менән бер рәттән дәүләт хеҙмәткәрҙәренең эшмәкәрлеген көйләй. Улар өсөн дә оҡшаш хеҙмәт гарантиялары ҡаралған. Мобилизация буйынса йәки үҙ ирке менән Рәсәй Ҡораллы Көстәре алдына ҡуйылған бурыстарҙы үтәүселәрҙең, контракт буйынса хеҙмәт итеүселәрҙең дә хәрби хеҙмәт осоро страховка пенсияһын формалаштырыу өсөн кәрәкле хеҙмәт стажына индереләсәк. "2022 йылдың 24 февраленән 21 сентябргә тиклем хәрби хеҙмәт үтәү тураһында контракт төҙөгән һәм хеҙмәт килешеүе өҙөлгән граждандар алдан биләгән вазифалары буйынса эшкә урынлашыуға өҫтөнлөклө хоҡуҡҡа эйә буласаҡ", - тип аңлатты Хәүефһеҙлек һәм коррупцияға ҡаршы тороу комитеты рәйесе Василий Пискарев. Дәүләт Думаһы депутаттары шулай уҡ РФ Торлаҡ кодексына һәм айырым ҡанундар сығарыусы акттарға ла төҙәтмәләр индергән. Уларға ярашлы, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өсөн һәм капиталь ремонтҡа түләүҙәр индереүҙе һуңлатҡан мобилизацияланған граждандар һәм уларҙың ғаилә ағзалары пеня түләмәйәсәк.

*✓ Андронов ҡәбиләләре ҡомартҡылары Башҡортостанда һәм Ырымбур өлкәһендә лә табылған, әммә Силәбе өлкәһендә һәм Ҡаҙағстан территорияһындағылары яҡшыраҡ өйрәнелгән.*

*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Икенсе бүлек. Бронза быуаты.



### Андронов ҡәбиләләре

Бронза быуатында Көньяҡ Себер, Ҡаҙағстан һәм Көньяҡ Уралдың киң далаларында мәҙәниәттәре ягынан нығ яҡын булған күп һанлы, малсылыҡ һәм ер эшкәртеү менән шөғөлләнгән ҡәбиләләр төркөмдәре йәшәй. Был оҡшашлыҡ уларҙың йорт-ҡура төҙөлөшөндә (торлаҡ типтары), ҡәбер ҡоролмаларында (ҡәберлек өҫтөндәге ер өйөмдәре, ҡәбер типтары), металл предметтар йыйылмаһында (эш ҡоралдары, биҙәүестәр) асыҡ сағыла, һәм тикшеренеүселәр ошо оҡшашлыкта хаҡлы рәүештә һүҙ барған ҡәбиләләрҙең йәшәү рәүешендәге, ижтимағи мөнәсәбәттәрендәге, килеп сығыштарындағы һәм телдәрендәге ғәмәли берлек сағылышын күрә. Ошоларҙы иҫәпкә алып, ғилми әҙәбиәттә улар "андроновсылар", тип атала, ә уларҙың мәҙәниәте лә ошо атама менән нарыҡлана (Андронов мәҙәниәте атамаһы Красноярск крайының Андроново ауылы янындағы ҡәберлектә ошондай мәҙәниәт ҡомартҡылары табылыу уңайы менән ҡабул ителә. - **Тәржемәсе иҫк.**)

Хәҙерге заман археологтарының күбеһе ошондай бик киң территорияла хасил булған андронов берлегенең бер-береһенән бик мөһим булмаған материал (ҡомартҡы) үҙенсәлектәре менән айырылып торған тиҫтәләрсә локаль археологик мәҙәниәттәрҙе (ҡомартҡылар төркөмдәрен) үҙ эсенә алыуы хаҡындағы фекер яҡлы. Быны, мәҫәлән, әүәлге берҙәм андронов мәҙәниәте ҡомартҡыларынан Көньяҡ Урал төбәге өсөн генә лә хәҙер һынташты-арҡайым, петровский, алакүл, федоровский, черкаскүл һәм межовский мәҙәниәттәре айырып күрһәтелә. Әммә барса тикшеренеүселәр андронов ҡәбиләләре өсөн уртаҡ булған мәҙәни берлекте бер тауыштан таный, шуға күрә, ошо оҡшашлыҡты һыҙыҡ өҫтөнә алып, улар андронов мәҙәниәтен андронов тарихи-мәҙәни берлеге, тип нарыҡлай. Теманы асыу өсөн уңайлыраҡ булһын тип, беҙ археологияла традицион булған "андронов мәҙәниәте" төшөнсәһен ҡулланабыҙ.

Шул тиклем киң территорияла нисек итеп ошондай оҡшаш мәҙәниәт барлыҡҡа килеү сәбәптәрен асыҡлау йәһәтенән фәндә әлегә берҙәм ҡараш юҡ. Күрһең, быны бронза быуаты башында малсылыҡтың үҫешә барыуы һөҙөмтәһендә ҡәбиләләрҙең хәрәкәтсән йәшәү рәүешен (урындан урынға күсеп йөрөү) үҙләштереүе менән аңлатып булалыр. Быға шулай уҡ климат шарттарының үҙгәреүе лә булышлыҡ иткән, тип фаразларға була: байтаҡ ҡына тикшеренеүселәр фекеренсә, бронза быуатында Евразия далаларында климат нығ ҡына йылына бирә, шуның һөҙөмтәһендә дала сиктәре төньяҡҡа табан киңәйә бара. Ошо факторҙар тәҫьирендә малсылыҡтың, бигерәк тә йылҡысылыҡтың әһәмиәте көсәйә бара, ә был үҙ сиратында халыҡтарҙың алыҫ арауыҡтарға күсеп китеүенә, сауҙа итеү үҫешенә, дәүере өсөн алдынғы идеялар менән алмашыуға, эре тел төркөмдәре үҫешенә уңайлы шарттар тыуҙыра. Андронов, абашев һәм бура мәҙәниәттәренең археологик ҡомартҡылары материалдары оҡшашлығы ошо ҡатмарлы тарихи күренештәр менән бермә-бер бәйле.

Андронов ҡәбиләләре ҡомартҡылары Башҡортостанда һәм Ырымбур өлкәһендә лә табылған, әммә Силәбе өлкәһендә һәм Ҡаҙағстан территорияһындағылары (Костанай, Төньяҡ Ҡаҙағстан, Аҡтүбә, Көкшетау һәм башҡа өлкәләрҙә) яҡшыраҡ өйрәнелгән.

Тыштан ҡарағанда улар бура һәм абашев мәҙәниәттәре ҡомартҡыларын хәтерләтә. Мәҫәлән, уларҙа киң таралыу тапҡан торлаҡтар ҡайһы саҡта бер-береһенә тар коридор менән тоташтырылған дүрт мөйөшлө ярым ер өйҙәрҙән хасил булған. Хәҙер андронов ҡәбиләләренең ер өҫтөнә һалына торған бүрәнә өйҙәре лә булыуы бәхәсһеҙ.

Андроновсылар, бронза быуатында Көньяҡ Уралға хас булғанса, киң ҡәберҙәр өҫтөнә ҡурған ҡорғандар. Әммә, бура һәм абашев ҡәбиләләренән айырмалы, бының өсөн таш ҡулланыу киң таралған була. Улар, мәҫәлән, ҙур таш плиталарҙан ҡәбер эсенә таш ҡаптар һап ҡуйған, ҡәбер өҫтөнә бүрәнә түшәлгән, улар таш плиталар йә иһә ҙур таштар менән ҡапланған; ер өйөмдәре лә таш менән нығытылған. Андроновсыларҙың ҡайһы бер төркөмдәре, ғөмүмән, үлгәндәрҙең ҡәберҙәре өҫтөнә тупраҡ өймәгән: улар ер өҫтөнә түшәлгән таштар менән генә уратып алынған.

Андронов ҡәбиләләренең күбеһе үлгән ҡәрҙәштәренең мәйеттәрен ҡәбергә һалып ерләгән, шулай ҙа уларҙың айырым төркөмдәре (мәҫәлән, федоровсылар) мәйеттәрҙе яндырған. Был ритуал торлаҡтарҙан ситтәрәк башҡарылған, яндырылғандан һуң тороп ҡалған, кальцийланған ваҡ һөйәктәр киң ҡәберҙәр төбөнә өйөп ҡуйылған. Бындай ҡәберлектәр Башҡортостандың Учалы һәм Баймаҡ райондарында табылған. Әммә улар андронов мәҙәниәте кешеләре йәшәгән көньяҡ һәм көнсығыштараҡ ятҡан территорияларҙа байтаҡҡа күберәк.

Мәйетте яндырыу йолаһы ут һәм ҡояш культы үҫешкән боронғо халыҡтарҙа барлыҡҡа килгән. Ошо үҙенсәлекле йоланың асылы, ҡояш илаһының барса боронғо халыҡтарҙа ғәмәлдә баш алла итеп ҡабул ителеүе айҡанлы, бәлки, үлгәндән һуң кеше йәненең ут ярҙамында ошо илаһҡа кире ҡайта алыу мөмкинлеген биреүендә булғандыр. Түбәндәге факттар иғтибарҙы йәлеп итә. Андроновсылар, ерләү төрөнә ҡарамайынса (яндырыу йә иһә ҡәҙимге рәүештә ерләү), ҡурғандар аҫтында тәрән һәм киң ҡәберҙәр ҡаҙыған. Яндырылған мәйеттәр ерләнгән ҡәберҙәрҙә, уларҙың ҡалдыҡтары күп булмаһа ла, балсыҡ һауыт-һаба һәр саҡта ла, ҡәҙимге рәүештә ерләнгәндәрендәге кеүек үк, ҡәберҙең бер мөйөшөндә, йәғни мәйеттең баш яғына урынлаштырылған.

Ҡәберҙәрҙәге әйберҙәрҙең мотлаҡ ошондай тәртиптә урынлаштырылыуы федоров ҡәбиләләре төркөмөнә ҡараған ҡәберлектәргә, яндырыу ҡалдыҡтарынан башҡа, беҙҙең ваҡытҡа тиклем һаҡланмаған башҡа байтаҡ ҡына әйберҙәр һалыныуы хаҡында фекер йөрөтөргә мөмкинлек бирә. Улар иҫәбендә кеше оҙонлоғондағы туҡыманан йә иһә күндән яһалған манекендар - үлгән кешенең кейемен һәм биҙәүестәрен ҡулланып яһалған ҡурсаҡтар булыуы бар. Андронов ҡәбиләләренә ҡараған Кулевичи VI (Урал аръяғы, Силәбе өлкәһе) һәм Көньяҡ Себерҙәге ҡайһы бер археологик ҡомартҡыларҙа ошондай манекен ҡалдыҡтары булған ҡәберҙәр табылған. Бындай ҡурсаҡ-манекендар үлгән кешенең йәне шунда инһен өсөн тәғәйенләнгән, тип фараз ителә.

Көньяҡ Уралда андронов мәҙәниәтенең сәскә атҡан осоро үҫешкән бронза быуатына ҡарай (Петров этабы, яҡынса б.э. тиклем XV - XII б.б.; Көньяҡ Уралдың археологик мәҙәниәттәренең абсолют һәм сағыштырмаса хронологияһы әлегә аҙ өйрәнелгән һәм, һирәк осрағанса, бары тик фараздарға ҡоролған. Бының өсөн бәхәсһеҙ критерийҙар булдырылыу менән әлегә тиклем ҡабул ителгән даталарҙың етди рәүештә үҙгәреүе мөмкин. Петров этабындағы ҡомартҡылар үҫешкән бронза быуатына хас байтаҡ сифаттарға эйә, шуға күрә уларҙың шунан да иртәрәк барлыҡҡа килеүен авторҙар инҡар итә).

Петров тибындағы ҡомартҡыларҙа бронза предметтарҙың күп булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алырға була, был андроновсыларҙың төбәктәге мәғдән яткылыктарын үҙләштереүҙә әүҙем ҡатнашҡан булыуына дәлил. Ҡаҙыныу материалдары металдың шул тиклем күп булыуы һөҙөмтәһендә ватылған йә иһә иҫкергән әйберҙәрҙең сығарып ташланыуын күрһәтә; мәғдән сеймалының күп булыуы арҡаһында ҡайтанан металл иретеү һирәк ҡулланылған. Пластинка тибындағы предметтар - бысаҡтар, ураҡтар, ҡасауҙар, төрлө биҙәүестәр киң таралған була. Балта, һөңгө остары, ураҡтар һәм башҡа ҡайһы бер әйберҙәр иретеп ҡойоу юлы менән яһалған.



*Туғыҙынсы һүрәт. Бронза эпохаһының ҡатын-ҡыҙ сәсмәүере һәм түшелдереге. Иҫке Ябалаҡлы ҡурғаны. Реконструкция. Рәссам Р. Ғ. Байназарова һүрәте.*

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 28-се һанда).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Днепр ярҙары - батырлыҡ майҙаны

Днепрҙың уң яҡ ярында, Вяле, Иҫке Иолча, Яңы Иолча, Березки, Комарин ауылдары рубежында немецтарҙың оборона һыҙығы алдан уҡ әҙерләнеп, нығ көсәйтелгән була. Бында доттар, дзоттар күпләп төҙөлә, тәрән траншеялар һәм бәйләнеш юлдары ҡаҙыла, оборона тотоу өсөн ҡорал, һуғыш кәрәк-яраҡтары туплана. Асаревичи, Галки, Усохи, Ляды һәм Колыбань ауылдары һәм утарҙары, Посудово тимер юл станцияһы оборона ҡоролмалары менән уратып алына. Ошо районда Днепрҙың киңлеге 600 метрға етә, тәрәнлеге 5 метрлап, ә уң яҡ яр буйы һаҙлыҡлы була.

Һөжүм алдынан политхеҙмәкәрҙәр, штурмға иң алдан барыусы подразделениеларҙа яугирҙар менән осрашып, ҡуйылған боевой бурыстың үтә лә мөһим булыуы, улар артынан йылғаны кисеүселәрҙе нисек булһа ла дошмандың тура утынан ҡурсалау мөмкинлеген тәьмин итеү хаҡында аңлатыу эштәре алып бара.

16-сы гв. атлы дивизияһының тарихи формулярында ҡаршы торған дошман частары хаҡында ошондай мәғлүмәт теркәлгән: "... дошман - 10-15 танк (шул иҫәптән "тигр" тибындағылары ла) һәм күп һандағы үҙйөрөшлө "фердинанд" пушкалары, миномет батареялары ярҙамында уң яҡ ярҙа ныҡлы оборона тотҡан 7-се пехота дивизияһы. Әсир ителгәндәрҙән һорау алыу 7-се пехота дивизияһына һаҡсы полк менән берлектә 276-сы пехота һәм 5-се танк дивизиялары килеп еткәнсе (улар бына-бына килеп етә, тип көтөлә) ошо рубежды тотоп торорға бойорола... Немецтарҙың уңайлы урындарға ҡуйылған пулеметтары һәм артиллерияһы Днепрға яҡынлашып була торған территорияны бик көслө утҡа тота ала, һәм дошман үҙ оборонаһының үтеп булмаҫлығына ышана. 25 һәм 26 сентябрҙә 16-сы гв. атлы дивизияһы үҙ саралары менән 38 һал, Иолшин тоҡтарынан 100-гә тиклем кеше һыйырлыҡ 2 паром эшләй, төн ҡараңғылығында йылға аша сыға башлай. Дивизияның һәм полктарҙың барса артиллерияһы һәм минометтары йылға аша сығыу урынынан йыраҡ булмаған урында позиция биләй".

Дивизияла, Иолшин тоҡтарын иҫәпкә алмағанда, йылға аша сығыу өсөн башҡа ҡорамалдар булмай (Иолшин тоғо - һыу үткәрмәй торған брезент тоҡ, ул кавалерияла ҙур булмаған йылға-күлдәр аша сыҡҡанда ҡулланыла. Уның эсенә яугирҙың әйәре һәм ҡоралдары һалына, ул атының теҙгененә тотоноп, йөҙөп сыға). Яугирҙар Днепрҙың һул ярындағы ауылдарҙағы балыҡсы кәмәләрен, бүрәнәләрҙе, өй ишектәрен, ҡойма таҡталарын, хатта мискәләрҙе йыйып алып, йылға аша сыҡҡанда ҡуллана. Был мөһим әҙерлек эштәрен дивизия инженеры, капитан Г.Г. Рогочий, комдив урынбаҫары, гв. полковнигы Әғзәм Әхтәм улы Фаварисов һәм 58-се гв. атлы полк командиры, гв. подполковнигы Таһир Таип улы Кусимов ойоштора һәм контролдә тота.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

**✓ Ҡартайыуҙың нисә йәштән һәм ниндәй урындан башланғанын берәү ҙә әйтә алмай, кемдер 30 йәштә үк ҡартайһа, бәғзеләр 90 йәштә лә йәш булырға мөмкин. Иң мөһиме - кешенең хроник ауырыуҙарын булдырмаҫҡа һәм аҙҙырмаҫҡа.**



ҠЫҘЫҠЛЫ ӘҢГӘМӘ

**Ғәҙәттә, маңлайҙа, тирелә һыр күрһәк, шунда уҡ "Уй, ҡартаям..." тип уйланабыҙ. Бәғзе ҡатын-ҡыҙ ғына түгел, хатта ир-аттар ҙа йәш булып ҡалыр өсөн аҡсаһын төрлө ҡиммәтле кремдарға тыға, ҡайһы берәүҙәр төрлө заманса процедураларға йөрөй башлай. Әммә тәбиғәттең үҙ ҡануны - кеше тыуа, уның бала сағы, үҫмер осоро, йәшлеге, ҡартлығы була. Һәр мәлдең үҙ асылы, үҙ матурлығы. Шуға ҡарамаҫтан, берәүҙәрҙе "тыумай ҡартайған", тиһәк, ҡайһы бер ололарға ҡарап, "ҡартая белмәй", "йәп-йәш әле", тип һоҡланабыҙ. Ғөмүмән, нимә ул ҡартлыҡ? Уны "аҙаштырып", "алдаштырып" буламы? Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ, 2-се Республика клиник поликлиникаһы врач-гериатры Рәшиҙә Мөхәмәт ҡыҙы ЙОСОПОВА менән бергәләп ошо һорауҙарға яуап эҙләйбеҙ.**

# ҠАРТАЯМЫ НИ ҺУҢ ЙӨРӘК...

## маңлайҙар һырланһа ла?

**Башҡа заман яңылыҡтары менән бергә тормошобоҙға геронтология тигән термин да килеп инде һәм ул кешенең ҡартайыуын төрлө аспекттарҙан сығып тикшерә. Уның гериатрия тигән өлөшө ҡартлыҡ сирҙәрен өйрәнеү, профилактикалау һәм дауалау менән шөғөлләнә. Был яңы тармаҡ менән уҡыусыларыбыҙҙы ентеклеберәк таныштырайыҡ, булмаһа.**

- Гериатрия, ысынлап та, медицинала яңы тармаҡ. Хәҙер ололар һаны йылдан-йыл арта бара. Ҡайһы бер ғалимдар фаразлауынса, 2050 йылға халыҡтың 40 процентын ололар тәшкил итәсәк. Шул уҡ ваҡытта йәмғиәттә оло йәштәгеләргә иғтибар ҙа кәмене. Һәм бына ошо хәл-торошто анализлап, ил Хөкүмәте 2025 йылға тиклем оло йәштәгеләр мәнфәғәтен хәстәрлеүсе ғәмәлдәр стратегияһын ҡабул итте. Унан алда РФ Президенты Владимир Путин медицина хеҙмәткәрҙәре алдына ололарҙың ғүмер оҙайлығын 80+ -ҡә еткерергә тигән бурыс ҡуйғайны.

Илдәге хәлдәрҙе анализлау гериатрия хеҙмәтен булдырыуға этәрҙе. Ул хеҙмәт элек тә бар ине. Советтар Союзында иң беренсе Гериатрия институты Киевта булдырыла. Хәҙер ошо хеҙмәтте киңәйтеү ихтыяжы тыуҙы һәм был йәһәттән Башҡортостан алдынғылар рәтендә булып сыҡты. 2016 йылда республика илдә ололар тураһында хәстәрлек күргән иң алдынғы субъекттар исемлегенә инде. Ошо ваҡыттан алып гериатрия хеҙмәтен әүҙем киңәйтәбеҙ, бөгөнгә республика буйынса 40 кабинетыбыҙ бар. Баш ҡаланың Туҡай урамында урынлашҡан ветерандар госпитале хәҙер Республика гериатрия үҙәге булып та тора һәм унда гериатрик 60 койка-урын булдырылған.

Гериатрияла төп йүнәлеш - ҡартлыҡ билдәләрен (старческая астения) иртә асыҡлау. Кеше оло йәшкә етеүгә бик күп хроник ауырыуҙар тупланмаһына әүерелә. Йәш ваҡытта уға иғтибар итмәйҙәр: кемдә быуын ауырта, кемдә ашҡаҙан, баш әйләнә, баш ауыртамы һ.б. - барыбер эшкә барелеп, эшләп йөрөй. Һуңынан ул хроник сирҙәр йышыраҡ ҡиҫкенләшә башлай, ахырҙа, үҙенә иғтибар иттерә. Дауалана башлайҙар, әммә ҡартлыҡ тип аталған мәлгә лә килеп етелә. Ҡартлыҡ, ҡартлыҡ астенияһы - ул диагноз түгел, шуға күрә оло йәштәгеләрҙе ҡарап, уларҙы иҫәпкә алып, күҙәтеп торорға кәрәк. Табип-гериатор тап ололарҙың барлыҡ булған ауырыуҙарын, гериатрик синдромдарҙы анализларға, дауалау, күҙәтеү планын эшләргә, был кешене нисек ҡарарға, нисек тәрбиәләргә, нимә яҡшыраҡ булыуы тураһында кәңәштәр бирергә тейеш, йәғни гериатрияның төп бурысы - әүҙем йәшәү рәүешен оҙайтырға ярҙам итеү.

Был йәһәттән иң мөһиме, ололарҙы яңғыҙлыҡтан ҡотҡарырға кәрәк. Әлбиттә, бында балалар, таныштар, дуҫтар, күрше-күлән менән аралашыу мотлаҡ булырға тейеш. Әммә шул уҡ ваҡытта ҡыҙыҡһыныуҙары хаҡында ла онотоп ебәрергә ярамай. Шуға күрә 2020 йылда Башҡортостан Башлығы тарафынан 417-се Указ ҡабул ителеп, 2024 йылға тиклем оло йәштәгеләрҙең сәләмәтлеген нығытыуға, социаль әүҙемлек осорон һәм сәләмәт ғүмер оҙайлығын арттырыуға йүнәлтелгән саралар планы (юл картаһы) раҫланды. Иғтибар итһәгеҙ, шунан һуң ололар туризмы әүҙемләште. "Өсөнсө быуын университеты" ойошторолғас, унда кемдер компьютерҙа эшләргә өйрәнә башланы, бейергә, йырларға, ижади түңәрәктәргә, төрлө спорт төрҙәренә йөрөүселәр һаны артты. Ололар өсөн бына ошо үҙ-ара аралашыу - иң мөһиме һәм ул да ғүмерҙе оҙайтыуға булышлыҡ итә.

Ҡартлыҡ ул ғүмерҙең кеше үҙе өсөн йәшәргә тейешле өлөшө: аҡыл һәм тәжрибә тупланған тормош юлы үтелгән, балалар үҫкән, абруй яуланған - үҙең тураһында уйларға ваҡыт еткән. Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында БМО-ның Генераль ассамблеяһы юҡҡа ғына 1 октябрҙе Оло йәштәгеләр көнө тип нығытып ҡуймаған. Был миҙгел, ысынлап та, тәбиғәттең генә түгел, ә кеше ғүмеренең дә алтын миҙгеленә етеүенә ишара һәм символик мәғәнәгә эйә. Был датаның маҡсаты ололарға иғтибар бүлеү, уларға ихтирам күрһәтеү, уларҙы ололау, хөрмәтләү, рәхмәт белдереү, сөнки һәр оло кеше - ул аҡыл һандығы. Шул уҡ ваҡытта был ололарҙы бер көн хөрмәтләнек тә - эш бөттө тигәнде аңлатмай, уларҙың проблемаларын асыҡлап, анализлап, хәл итеү ҙә кәрәк, ололар даими рәүештә иғтибар үҙәгендә булырға тейеш. Гериатрия хеҙмәте тап ошо маҡсатта булдырылды ла инде.

**Ололарҙың ғына түгел, ғөмүмән, кешенең тормоштағы үҙ урынын, әһәмиәтен күрһәтергә кәрәк. Ололарға был икеләтә мөһим, сөнки улар ғүмер буйы ҡайҙалыр үҙенең көсөн, энергияһын, аҡылын биреп эшләгән һәм хаҡлы ялға сыҡҡас, үҙен ҡапыл йәмғиәттән ситкә тибәрелгән кеүек тоя башлай... Ә инде уның ниндәйҙер шөғөлөн күреп, иғтибарға алып, хуплап,**



**күтәрмәләп ебәргәндә, улар ҡабат йәмғиәттең әүҙем ағзаһына әйләнә лә китә...**

- Әлбиттә, оло йәштәгеләрҙең әһәмиәте шунда - улар был тормошта йәшәүҙең бик ҙур тәжрибәһенә эйә, уларҙың иңендә түҙемлек, ҡаһарманлыҡ ята. Шуға уларҙы йәмәғәт эштәренә нығыраҡ йәлеп итергә кәрәк. Улар йәштәргә өлгө күрһәтһен әйҙә.

**Ҡартлыҡ астенияһы тигәнде телгә алдығыҙ. Нимә ул ҡартлыҡ астенияһы һәм уның төп билдәләре ниндәй?**

- Ҡартлыҡ астенияһының төп билдәһе - кеше үҙ-үҙен ҡарау һәләтен юғалта, башҡалар ярҙамына мохтаж булып ҡала. Хәлдә ана шуға еткермәҫкә кәрәк. Өйөндә оло кеше үҙен-үҙе ҡарарлыҡ шарттар тыуҙырылһын. Ололарҙа ҡартлыҡ астенияһы киң таралыу хәүефе шул: улар ҡолап, аяҡ-ҡулын, билен һындырыуы, имгәнеүе ихтимал. Бөгөн бигерәк тә ошо иң ҙур проблемаларҙың береһе. Шуға күрә өй иҙәнендә балаҫтар ятмаһын, кейеп йөрөгән тапочкалары бушаҡ, арты асыҡ булмаһын, төндә бәҙрәфкә барыу ихтыяжы булһа, стенала бра йәки карауат эргәһендәге тумбочкала лампа янып торһон. Телевизор ҡарайым, тип, гел генә диванда йәки карауатта ғына ятмаһындар, мотлаҡ берәй эш йәки шөғөл менән мәшғүл булһындар. Баш мейеһе һәр саҡ эшләп торорға тейеш. Барлыҡ ғалимдар аҡыл камил булһын өсөн йөрөргә, хәрәкәтләнергә ҡуша. Йүгерергә түгел, ә атлап йөрөргә. Оло кеше көн дә саф һауала йөрөргә, дауаланыу гимнастикаһы менән шөғөлләнергә тейеш. Бының бер ауырлығы ла юҡ - иртән уяныс, яткан килеш кенә физик күнегеүҙәр эшләргә мөмкин.

Икенсе проблема- ололарҙың рациональ тукланыуы. Улар насар ашай башлай, йә уларҙың теш протезы менән проблема килеп тыуа. Күптәр сәй эсеү менән генә лә мөрхәтһенергә өйрәнә. Улай ярамай. Беҙ, табип-гериатрҙар, ололарға нимә ашарға, күпме һыу эсергә икәнен билдәләгән диета тәҡдим итәбеҙ.

Ололарҙа ике синдром бар: саркопения һәм мальнутриция. Мальнутриция - нормаль рациональ тукланыуҙың боҙолоуы, аҡһымдың аҙ ҡулланылыуы. Тештәре булмағас, ололар ит ашамай башлай, организмдарына аҡһымлы аҙыҡ етешмәй. Ҡайҙан көс, хәл булһын! Саркопения булғанда мускулдарҙың көсө юғала, кеше ышаныслы ғына итеп баҫып йөрөй алмай башлай.

**Ғөмүмән, барлыҡ ғәмәлдәр иң элек кешенең мейеһендә тыуған уй-фекерҙәндер. Юҡҡа ғына, иң элек һүҙ булған, тимәйҙәр бит. Ҡартайыу тураһында ни тиклем күберәк уйлайһың - организм уй көсөнә, һүҙ көсөнә буйһоноп, үҙгәрештәр кисерә башлай. Ә уйҙарың ҡартлыҡ тураһында түгел икән, организм да икенсе хәстәрҙәр менән йәшәй. Тимәк, бары тик кешенең фекерләүен үҙгәртергә һәм шуға өйрәтергә кәрәк... Ошо фекергә ҡарата нимә тиерһегеҙ?**

- Бәлки, ниндәйҙер кимәлдә, шулайҙыр ҙа, әммә һаулыҡ тураһында онотоорға ярамай. Ниндәйҙер операция талап ителһә - эшләтергә кәрәк. Тикшереүҙәрҙән һуң ниндәйҙер насар ауырыу килеп сыҡҡан икән, уны барлыҡ көстө һалып дауаларға кәрәк. Бында фекерләүҙе үҙгәртеп кенә булмай. Ҡайһы берәүҙәр, мин үләндәр эсәм, минә врач ярҙамы кәрәкмәй, уларға барып тикшерелеү үтә башлаһаң, йөҙ төрлө сир табалар, ти. Сирҙең алдараҡ табылыуы, асыҡланыуы яҡшы, сөнки аҙаҡ һуң булыуы ла бар. Шуға күрә хатта ололарға ла мотлаҡ йыл һайын диспансерлаштырыу үткәрергә кәрәк. Әммә ауырыуға, депрессияға бирелергә ярамай! Күптәрҙең ҡартлыҡ сәбәбе - ул яңғыҙлыҡ һәм депрессия. Ҡартлыҡ астенияһы бик йыш яңғыҙҙарҙа, ташлап кителгәндәрҙә, имен булмаған социаль шарттарҙа йәшәүселәрҙә, алкоголле эсемлектәр, никотин менән мауығыусыларҙа, асарбаҡтарҙа күҙәтелә.

**Ҡатын-ҡыҙҙың ҡартайыуы муйынынан, ҡулдарынан һәм аяҡтарынан башлана, тиҙәр. Әммә йәштәрҙең дә муйынында һырҙар булыуы йәки йәштәрҙең дә аяҡтары һыҙлауы мөмкин. Ғөмүмән, ҡартайыу ҡасан һәм нисек башлана?**

- Ҡартайыуҙың нисә йәштән һәм ниндәй урындан башланғанын берәү ҙә әйтә алмай, кемдер 30 йәштә үк ҡартайһа, бәғзеләр 90 йәштә лә йәш булырға мөмкин. Иң мөһиме - кешенең хроник ауырыуҙарын булдырмаҫҡа һәм аҙҙырмаҫҡа. Бының өсөн, тағы бер ҡабатлайым, әүҙем сәләмәт тормош алып барырға, йәшәүгә ҡыҙыҡһыныу юғалтмаҫҡа кәрәк. Йәшәүгә ҡыҙыҡһыныу юғалыу менән хроник сирҙәр күбәйә, улар ҡиҫкенләшә башлай.

Башта кеше ҡартлыҡты һиҙмәй бит. Йәш ваҡытта эшкә башкөллләй сумып, организмдың теге йәки был ере сигнал биргәненә әллә ни иғтибар итмәйбеҙ, ҡайһы бер ауырыуҙарҙы көсәйтеп тә ҡуябыҙ. Әкренләп улар күбәйә, ҡиҫкенләшә. Ҡартлыҡтың барлыҡ билдәләре ана шунан башлана ла инде. Шуның өсөн һәр кем үҙенең һаулығын үҙе хәстәрләргә, әүҙем оҙон ғүмерлелеккә үҙе әҙерләнергә тейеш.

Шулай уҡ кешенең ҡартлығын социаль - тормош-көнкүреш проблемалары тиҙләтә. Шуға социаль хеҙмәттәр, табиптар бер булып эшләргә, ололарҙың ындай проблемаларын хәл итергә тырышырға тейеш.

**Хәҙер табиптарға алдан яҙылып ҡына күренергә мөмкин. Әммә өлкәндәр компьютерҙы, телефонды бик үҙләштермәгәндәр һәм табипҡа алдан яҙыла алмайҙар. Йәиһә уға тиҙ арала ниндәйҙер белгескә ҡаралырға кәрәк. Ҡайһы берҙә поликлиникаға барып-барып та инә алмайынса, һуңынан ҡул һелтәп ҡуялар. Был бигерәк тә ауыл ерендә йәшәүселәргә хас. Шулай ҙа, өмөтһөҙ - шайтан ғына, ти: гериатрға нисек яҙылырға була?**

- Республика Башлығы Указына ярашлы, һәр медицина учреждениеһында, бигерәк тә поликлиникаларҙа, мотлаҡ көмөш осор йәшендәгеләрҙе ҡабул итеү өсөн бер көн булдырырға, тиелгән һәм ул йылына бер нисә көн булырға тейеш. Асыҡ ишектәр көнө, тип атала ул. Уның маҡсаты - һәр участканан һәр бер оло кешене саҡыртырға, төрлө белгестәргә күрһәтергә, анализдар тапшыртырға кәрәк. Йылына кәм тигәндә ике

✓ ***Гериатрға яҙылыуға килгәндә, идеаль хәл-торошта һәр бер дауалау учреждениеһында гериатрия хеҙмәте булырға тейеш, сөнки һәр территориаль участкала ла ололар күп. Гериатрға участка терапевы ебәрә.***



тапҡыр шундай тикшереү үткәреү мотлаҡ.

Дөрөҫөн әйткәндә, ауылдарҙа йәшәүсе өлкән йәштәгеләр ҡартлыҡ астенияһы хәүефе төркөмөндә тора, сөнки улар, ысынлап та, оҙаҡ йылдар буйы табипҡа күренмәй йөрөй. Был мәсьәлә һуңғы йылдарҙа "Сәләмәтлек поездары" тип аталған күсмә бригадалар ярҙамында хәл ителә, уларға төпкөл ауылдарға ла барып етеү бурысы ҡуйылған.

Гериатрға яҙылыуға килгәндә, идеаль хәл-торошта һәр бер дауалау учреждениеһында гериатрия хеҙмәте булырға тейеш, сөнки һәр территориаль участкала ла ололар күп. Гериатрға участка терапевы ебәрә. Бының өсөн 60 йәште үткән һәр пациенттан тәүҙә анкета һорауҙарына яуап алына, әгәр анкеталағы ете һорауҙың барыһына ла нормаль яуап алынһа, хатта гериатрҙың ҡабул итеүе лә кәрәкмәй. Әгәр ҙә инде ошо яуаптарҙың яртыһы проблеманы күрһәтеп тора икән, гериатрға йүнәлтеү зарур.

Гериатр киң профилле табип. Ул пациентты 10 минут ҡына ҡарамай, комплекслы гериатрик баһа бирер өсөн кәмендә ике сәғәт үтергә тейеш. Сөнки гериатрик синдром тигән төшөнсә бар, унда 80-дән артыҡ синдром инә һәм һәр берененә дауалау һәм ҡуҙәтеү тактикаһы айырым. Шуға күрә тикшереү оҙаҡ ваҡытты ала.

**"Сәләмәтлек поездары" хеҙмәте буйынса халыҡта ҡәнәғәтһеҙлек тә бар, улар халыҡтың өмөтөн бик үк аҡлап бөтмәй. Мәҫәлән, ауылдарҙа баш ҡала һынлы баш ҡаланан белгестәр килгәс, күберәк тар специалистар буйынса табиптарҙы көтә: кардиолог, окулист, маммолог һ.б. Ә башҡа белгестәрҙе, шул уҡ ЭКГ-ны улар урындағы поликлиникала ла үтә ала...**

- Уныһы шулай, әммә барлыҡ белгестәрҙе лә ул бригадалар менән ебәреп булмай. Уларҙа мотлаҡ терапевт, окулист, ЛОР, хирург булырға тейеш. Поликлиникала, ғәҙәттә, бер генә кардиолог ҡабул итә. Уны тәғәйен эшенән айырып, ауылға ебәреү мөмкин түгел. Шуға күрә, врач-терапевт һәр кемде баштан-аяҡ ҡарарға, тикшерергә бурыслы. Һәм ниндәйҙер шик булһа, күсмә бригада табиптары артабан тикшерелергә йүнәлтмә бирә.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Әлеге ваҡытта ололар ике төркөмгә бүленә: оло йәштәгеләр - 60 йәштән 74 йәшкә тиклемгеләр һәм ҡарттар - 75 йәштән өлкәндәр. Иғтибарлап ҡуҙәтһәң, ҡайһы бер ололар хатта телефонынан айырыла алмаған ейән-ейәнсәрҙәренән етеҙерәк, һығылмалыраҡ, ныҡлыраҡ. Бәғзеләре өсөн хаҡлы ял - икенсе һулыштары асылыуға этәргес булғандай: улар Башҡортостандың иҫтәлекле урындарына сәйәхәттә йөрөй, скандинав таяҡтары менән атлауҙы үҙләштерә, йылға буйлап һалда аға, тау башына менә, йүгерә, ижад менән шөғөлләнә... Ҡыҫҡаһы, тормошҡа ҡабаттан ғашиҡ була! Әйтегеҙ инде хәҙер, йөрәк ҡартаямы?**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

УЙЛЫҒА - УЙ

# ПЕНСИЯЛА ЯҠШЫ ТҮГЕЛ...

## ә бик яҡшы!



Икенсенән, әлбиттә, әле иҫкә алған икмәкһеҙ ҙә йәшәп булмай шул. Шуға күрә, һәр оло кешегә кәрәк булған пенсия хаҡында ла бер аҙ фәлсәфәләп алайыҡ. Пенсия, әлхәмдүлиллаһ, беҙгә ғүмеребеҙ ахырынаса бирелгән ниғмәт. Эшләмәгән пенсионерҙарға хөкүмәтебеҙ фәләнсә процент аҡса өҫтәп тора. Шуның өсөн Раббыбыҙға шөкөр итәйек, тимәксемен. Илдә барған көрсөк, инфляция-фәләндәрҙе иҫәпкә алып өҫтәлеп торған сумма артыҡ ҙур булмаһа ла, барыбер был - ҡыуаныслы хәл бит. Ҡатмарлы халыҡ-ара хәлдәр булыуына ла ҡарамаҫтан, етәкселәребеҙ оло быуын кешеләрен мөмкин тиклем ҡайғыртырға тырыша. Ғүмер буйы ниндәйҙер эштә тир түгеп, Пенсия фондына эш хаҡының күпмелер бер өлөшөн түләп барған граждандарын күҙ уңынан сығармай.

Ошо өлкәлә хәбәрҙар булған ҡайһы бер авторҙар пенсия системаһының эске төҙөлөшөнә инә биреп, шул хаҡта фекер йөрөтөп, хатта уның бәғзе бер "йомшаҡ яғын" күрһәтеп, бер аҙ тәнҡитләп тә алғылай. Шунһыҙ ҙа булмайҙыр, сөнки пенсияларыбыҙҙы тейешенсә кимәлдә тотоу өсөн ана шундай зыялыларыбыҙҙың фекерҙәрен дә иҫәпкә алыуҙары бар. Ә миңә килгәндә, ул системаның нескәлектәре менән әллә ни ҡыҙыҡһынмаҫҡа тырышам. Был мәсьәләгә тыштан ғына, ифрат ябай итеп ҡарау, ни бирһәләр - шуның менән ҡәнәғәт булыу яғындамын (Ҡасандыр берәү: "Үгез булса булсын - сөт булсын..." - тип тә әйткән имеш...).

Пенсияға сыҡҡан ҡәрҙәштәремә хатта "Тормош өр-яңынан башланды бит", тип әйткем килә. Бер мәл минән алдараҡ хаҡлы ялға киткән бер ағайҙан: "Пенсияла нисек, яҡшымы?" - тип һорағайным. Юмор яратҡан был кеше етди төҫ алып: "Юҡ, пенсияла яҡшы түгел, - тип яуап бирҙе. Бер аҙ пауза тотҡандан һуң, өҫтәп ҡуйҙы: - Ә бик яҡшы!.." Ысынлап та, бәғзе берәү: "Аҙ түләйҙәр, шуныһына етмәй, быныһын алып булмай",- тип зарланһа ла, беребеҙ ҙә аслы-туҡлы йәшәмәйбеҙ, Аллаға шөкөр. Һәммәләребеҙҙең һыуыткысы төрлө аҙыҡ-түлек менән тулы. Хатта автомобилһеҙ пенсионерҙар ҙа юҡ тиерлек хәҙер. Хаҡлы ялдағылар айырыуса яҡлаулы ла тип һанайым. Ҡайһы бер ҡарттар ваҡытлыса эш таба алмай йөрөгән берәй улын йә ҡыҙын, шул ғәзиздәренең ғаиләһен дә бағып торорға өлгөрә. Һаулығы ярaҡлы булып, элекке эшен артабан дауам иткәндәр ҙә бар. Һис хәрәкәтһеҙ тора алмағандар, үҙенең баҡсаһына йомолоп, шунан ҡәнәғәт таба, файҙаһын да күрә. Хәрәкәттә - бәрәкәт, тигәндәр бит боронғолар ҙа. Йыбанмай, йәй буйы тырышып эшләп, көҙгә ҡарай байтаҡ ҡына eләк-емеш, йәшелсә әҙерләп ала ҡуптар. Ҡала ерендә ғүмер итеүенә лә ҡарамаҫтан. Ауыл тураһында, әлбиттә, әйтеп торорға ла түгел.

Ауыл, тигәндәй. Бынан ярты быуат элекке ауылыбыҙҙы хәтерләйем. Ауылдаштарыбыҙ, нишләптер, баҡсала картуфтан башҡа бер нәмә лә сәсмәй торғайны. Шундай бай, уңдырышлы ерҙәре буш ята ине. "Кәртә артында" өйөлгән тиреҫтә Баймаҡ урыҫтары килеп, йөк машиналарына тейәп алып китә. Тиреҫ хужаһы (ҡыйҙарын алып киткәне өсөн) уларға хатта рәхмәт әйтеп тороп ҡала. Мин бала кеше: "Был тиҙәк, сүп-сар урыҫтарға нимәгә кәрәк икән?" - тип аптырай торғайным. Баҡсаларыбыҙға (уларҙы тик "картуфлыҡ" тип кенә атай инек) тиреҫ түккән кешеләрҙе лә күргәнем юҡ ине тиерлек. Бер ерҙә картуф уңмай башлаһа, "ер иҫкерген" тип, икенсе урынды һөрөп, бәғзеләр әлеге картуфлыҡтарын яңыртып ала ине... Йәй аҙаҡтарында инде 9-10 саҡрымда ятҡан Баймаҡтан баяғы урыҫтар алма, помидор, ҡыяр, кишер, кәбеҫтә, һуған һатырға алып килә торғайны. Ауыл кешеләре аҡсаға йә май, йомортҡаға, йә булмаһа, йөнгә алыштырып, ана шул емеш-йәшелсәләрҙе һатып ала. Бындай тәм-томдар тик урыҫтарҙа ғына була икән, тип уйлай торғайным. Мин, ярай инде, бала кеше. Ә ололар был хаҡта ни уйлап йәшәгән икән? Ошо көнгәсә ғәжәпләнеп бөтә алмайым...

Байтаҡ ваҡыт сит тарафтарҙа йөрөргә тура килде. Тормош бит. Илгә ҡайтыуыма донъялар ҙа үҙгәреп китте. Шул осорҙағы "үҙгәртеп ҡороу" этәргес булыу сәбәбенәме, ауыл халҡы үҙ еренең ҡәҙерен белә башланы, буғай. Бөгөнгө көндә, шөкөр, йәштәребеҙҙең, хатта ололарҙың да төрлө кәрәкле йәшелсә-емеш үстерергә өйрәнеп алыуын күреп шатланам. Ауылда баҡса тотмаған кеше лә юҡтыр әле хәҙер. Һәр кемеһенең баҡсаһында парник, теплицалары ла бар. Хатта әлеге тиреҫенең үҙенән артҡанын ҡала кешеләренә яҡшы ғына хаҡҡа һатып та ебәрәләр! Ауылда көн күргән хаҡлы ялдағы әбей-бабайҙарға шунан башҡа ни кәрәк инде. Моғайын, улар ҙа бала сағында әле минең һымаҡ уйланғандыр ҙа, ологая килә, "Беҙ гарадскуйҙарҙан чем хуже!" тип, үҙҙәренең уңдырышлы ерҙәренән файҙа алып йәшәргә йөрьәт иткәндәр. Өҫтәүенә, икмәк-тоҙлоҡ пенсия аҡсаһын да почтальон ваҡытында алып килеп тора бит. Беҙҙең туҡһанға яҡынлашып барған бер ҡоҙа: "Эй, ғүмер буйы беҙ ынтылған камунизм бөгөн ысынлап та килде бит! Һис бер нәмәгә мохтаж түгелбеҙ, түлке ғүмер генә үтеп киткән икән шул..." - тиер ине.

Ғүмер... Ысынлап та, Аллаһ Тәғәлә тарафынан бер мәртәбә генә бирелгән бит ул беҙгә. Йәшәйбеҙ, йәшәйбеҙ ҙә, мәле еткәс, китеп тә барабыҙ... Ә шулай ҙа күпселек кешегә бер ҡасан да бер нәмә лә етешмәй, үкенескә. Раббыға шөкөр итә белмәгәндәргә күпме бирһәң дә аҙ булып тойола. Бәйғәмбәребеҙ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм: "Әҙәм балаһына бер тау алтын бирһәң, икенсеһен теләр. Ә ике тау алтын бирһәң, өсөнсөһөн теләр... Ысынында, кешене тик ер генә туйындыра ала..." - тигән мәғәнәле хәҙисе бар. Ғүмер буйы донъя малы йыйып та, аңғармаҫтан, бер секунд эсендә ана шул мөлкәтен мәңгелеккә ташлап китә кеше... Ҡыҙғаныс, шулай бит?

Ә үкенесле булмаһын өсөн был тормошто нисегерәк ҡороу кәрәк һуң? Аллаһ илсеһенең шул хәҙисен "Бөтә кеше лә ярлы йәшәргә тейеш икән", тип, бер яҡлы ғына аңлау дөрөҫ булмаҫ. Бай булыуҙың бер ҙә яман яғы юҡ. Хәләлдән килә икән, әйҙә, байыҡ! Үҙең үлгәс, балаларың етеш йәшәһен өсөн йыйылған байлығың, кәрәкле йорт-йыһаздарҙың мул булыуы һис кенә лә насар нәмә түгел. Күпселек, бәлки, тап ана шундай ниәт менән донъя малы йыялыр ҙа ул. Тик әлеге хәҙис фәҡәт был тормошҡа ғына мөкиббән булып, үҙ мөлкәтенән башҡа бер ни ҙә күрмәй, барыбыҙ ҙа һис шикһеҙ барасаҡ Ахирәткә әҙерлекте онотоп ғүмер итеүсе кешеләргә ҡағылышлы. Бер аҡыл эйәһе әйткән: "Донъя эшен мәңгелеккә йәшәргә килгән һымаҡ итеп алып бар, ә Ахирәт эштәрен "Бөгөн-иртән донъянан китеп барыуым ихтимал" тигән уй менән үтәп йәшә".

Һәм тағы. Бәғзе бер милләттәштәребеҙ хаҡлы ялға сыҡҡас та, үҙен артабан әллә күпме йәшәр һымаҡ тойоп, кредит һаҙлығына ла батыусан. Беренсенән, процентҡа биргән һымаҡ уҡ, процентҡа алыу ҙа (риба) оло гонаһтарҙан һаналһа, икенсенән, бурысыңды ҡайтара алмаған көйө был донъянан китеп барыуың да ихтимал бит. Остазыбыҙ Ризаитдин Фәхретдин үҙенең 1916 йылда Ырымбурҙа сыҡҡан "Джәүәмиғүл кәлим шәрхе" исемле китабында күп кенә Бәйғәмбәр хәҙистәренә аңлатма биргән. Шулар араһында: "Бурыслы булып вафат булған әҙәм ҡәбере эсендә бығауланып торор. Был бығауҙан уны бурысын үтәү генә азат итер", - тигән риүәйәт тә бар. Әгәр мәрхүмдең яҡындары ла уның өсөн түләп бөтөрмәй икән, бирәсәге был әруахтың муйынында эленеп тора ла тора, имеш. Хаҡлы ялда күпме йәшәребеҙҙе бер Аллаһ ҡына белә. Уның тарафынан бирелгән мөмкинлегебеҙҙе - аҙмы күпме ҡалған ғүмеребеҙҙе заяға үткәрмәйек, үҙебеҙгә-үҙебеҙ ғәзелһеҙлек ҡылмайыҡ, тип әйтергә лә теләгәйнем.

Оло йәштәге ҡәрҙәштәремә: "Йәшлегемә атлап түгел, йүгереп ҡайтыр инем..." - тип, һағышланып ултырыу урынына, "Картлығым - байлығым", тигән шиғырҙа (лозунг) өҫтәнлек биреп, һис кенә лә бойоҡмай, алтын көҙөбөҙҙө мөмкин тиклем файҙалы итеп үткәрергә кәңәш итер инем. Бәйғәмбәребеҙҙең: "Һәр кем үҙ урынында булырға тейеш",- тигән хәҙисе лә бар. Урыныбыҙҙы, дәрәжәбеҙҙе белеп, олоғайыуыбыҙҙы танып, йәштәр эшенә әллә ни тығылмай, үҙебеҙҙе ысын аҡһаҡалдар һәм ағинәйҙәр тип хис итеп йәшәйек, ин шәә Аллаһ.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

***✓ Йома намаҙын намаҙлығын урындыҡ түренә йәйеп ебәреп, өй мөйөшөнә текәлеп уҡыған өләсәйем изге ғәмәлен атҡарып, хуш ҡылып, битен һыпырғандан һуң, ап-аҡ сәстәрен яҙып ябынған аҡ кәшәмир яулығының эсенә тартып йәшерҙе.***




Түбәнге урам осонда ғүмер баҡый яңғыҙы көн иткән туған-тыумасаһыҙ Әлмәғиҙә ҡарсыҡ кинәт аяҡтан яҙып сирләп киткән икән. Көтмәгәндә-уйламағанда сир-сәрпәтләмәй инде ул әҙәм балаһы, бәлә бит ағас башынан түгел, иң әүәл кеше башынан йөрөй. Өләсәйем менән әсәйемдең, сит-яттар ишетеп ҡалыуҙан һипһенеп, йәй көндәрендә ябылыу белмәгән ишегебеҙҙе ҡыҫып ҡуйып, ҡаға-һуға әңгәмәләшеүҙәренән төшөндөм, уға ҡылтамаҡ, тигән алама сир йоҡҡан, йәнәһе лә. Тамаҡ ауыртыу артыҡ бәлә түгел, бөгөн ауыртып бимазалаһа ни, иртәгеһенә үтер. Ҡышын һырғалаҡ шыуғанда боҙбармаҡ ялаған, йәйгеһен тән күгәргәнсе Һаҡмарҙа һыу ингән һәр балаға яҡшы таныш нәмә ул тамаҡ шешеү, тауыш ултырыу.

Йома намаҙын намаҙлығын урындыҡ түренә йәйеп ебәреп, өй мөйөшөнә текәлеп уҡыған өләсәйем изге ғәмәлен атҡарып, хуш ҡылып, битен һыпырғандан һуң, ап-аҡ сәстәрен яҙып ябынған, ситтәренә ҡалҡыу биҙәк төшкән аҡ кәшәмир яулығының эсенә тартып йәшерҙе, шунан урындыҡтан ер иҙәнгә төшөп, аяҡтарына ситек тышынан кейә торған ыҡсым галошын ҡатты ла оҙон итәкле аҡтан-аҡ күлдәгенең итәген ҡыу бармаҡтары менән семтеп төҙәтештергәс, урта тауышланып, өй эсендә икәүҙән-икәү генә булһаҡ та бер кемгә лә аныҡ төбәп тәғәйенләнмәгән хәбәрен һалды:

- Әлмәғиҙә әхирәткә барып киләйем, бумаһа! Элекке көн сулала уға Фәтхиә һуғылырға ниәтләй ине, кисә Вазифа, бөгөн минең сират, иртәгә - Гөлйыһандыҡы. Шулай ҡулалмаш итмәһәк, кем ҡарар уны, ауырыу хәлен һау белмәй тигәндәй, сырхау килеш уның кемгә хәжәте бар? Мынау мейе ҡайнап торған йәйге селләлә сарсап, ауыҙы кибеп яталыр, бахыр, ыумасҡа сөсө ҡатыҡ туғып илтәйем, йөрәгенә ял алыр, исмаһам.

Уның өндәшеүенең төрлөлөгөнә өйрәнеп, күнеп бөткәнмен күптән: шыбырлап әйтһә, икеләнә, тимәк, уртасаһы - ҡылаһы эшенә тәүәккәллеген белдерә, сағыуырағы - ҡәтғи кире ҡағыуға ауаздаш, бойороҡҡа тартым һуңғыһын ишетәһең икән, уға яҡынлауҙан, ҡайтымһаҡланыуына өмөт тотоп, нимәләр хаҡында үтенеүҙән фәтүә самалы. Шулай ҙа ғауғасыл, сарға кеше түгел өләсәйем, ул урта тауышлы. Ауылдың берҙән-бер кендек әбейе, алыштырғыһыҙ имсеһе шулай булырға тейештер ҙә.

Урындыҡ мөйөшөнә йылы һирпелеп өндәшеүенә ҡарағанда, иртәнән алып ҡара кискәсә ураҡта йөрөгән әсәйемдең өйҙә юҡлығын иҫәпкә алып, ейәнен, йәғни мине, эйәртергә хәл иткәндер, күрәһең. Өйҙә яңғыҙ үҙемде ҡалдырып китеү ике осло, ай күрҙе, ҡояш алды, юғалырға, мөстән малдай аҙып-туҙып сығып китергә генә торам. Шунан уйнап туя белмәгән мине эңер төшкәнсе ауыл буйлап ҡыҙырып йөрөп эҙләп, йә әсәйем, йә өләсәйем табып ала, үҙ иркем менән шыпа ла ғына ҡайтып инә белмәйем.

Өләсәйем бөгөнгө көн башҡарыр уй-ниәтен шулай тумбытты ла тиҙ арала өй ҡырлауындағы дүрт мөйөшө уҫаҡ тияуҙарға терәлгән ҡабыҡ ҡыйыҡлы йәйге мейескә ҡоро-һары ырғытып, ҡаҙанға һыу ҡойоп, ут тоҡандырып ебәргәс, арыш онона йомортҡа һытып, самалап тоҙ һалып, ҡамыр баҫырға кереште, шунан туҡмас таяғы менән йәйеп тигеҙләгән йәймәне ваҡ ҡырсынташ дәүмәленә килгәнсе устарында ыуып, ҡуштабаҡҡа төшөрә башланы. Әҙерләгәнен урғып ҡайнаған һыуға ашыҡмай ғына таратып һибә, өҙлөкһөҙ болғай, һапыра. Оҫта бешерә ул ыумасты, яраштырғанына ҡаймаҡ йә май һыҙлығы ла өҫтәп ебәрһә, теленде йоторлоҡ ләйтер дауаһы, име, әмәле, әпсен-өпсөнө бар. Дауа, тигәндәй, дауаханала файҙаһы тейә һалып бармаған дарыуҙар, уколдар менән ыҙалаталар, йонсоталар ауырыуҙарҙы, өләсәйем иһә миҙгеленә тап килтереп һайлап йыйып киптергән төрлө үләндәр менән сихәтләндерә сирле сырхауҙы. Һылауға ла ҡулы үтә килешә, иретелгән ҡаҙ майы менән майлап ебәрһә, бил-арҡаларынан сыҙамағандарҙың һынығыуы йомшара, ҡатыуы ҡаса, эстәре төшкәндәрҙең ҡорһаҡтары юғары күтәрелә, биҙәүҙәр бер ни тиклем ваҡыттан йөклөгә ҡала. Бына ниндәй илаһи һәләткә эйә минең өләсәйем! йәшерен ғилләһе бар, тамағы ғына тиһә лә, сире үтә лә етдиләр, күрәһең. Улай тиһәң, ошоғаса участка дауаханаһында ятҡан кешене ни сәбәптәндер тотҡарламай йортона ҡайтарғандар бит, ә унан тамам нығындырып, һауыҡтырмай тороп сығара һалып бармайҙар.

Өләсәйем урындыҡ ситенә һаҡты, ә мин селтәрләп сигелгән япма түшәлгән мейес көлдөксәһенә ултырышымды терәнем дә торлаҡтың берҙән-бер йән эйәһе бесәйҙең ҡолаҡ һыртын тырнап, арҡаһынан һыйпарға керештем. Ҡупшыҡай бесәйҙең исеме. Ошоғаса Әлмәғиҙә ҡайҙа барһа ла эт шикелле була. Ашын әҙерләп бөткәс, кибеткә йөрөткән ашаулыҡтай ҙур ҡытай яулығына тағы ла ул-был ашандыны өҫтәп һалырға тотондо. Йыйынып бөткәс киттек, арауыҡ ҡалдырып, тағылып. Элгәре, итек ҡуңысынан саҡ ҡына ҡалҡыуыраҡ сағымда камзул кеҫәһенә йәбешеп йәнәш юрғалай инем, хәҙер өсөнсө класты бөтөргәс, ғүмерендә мәктәп тупһаһын ашатлап үтмәгән, әлепте таяҡтан айырмаған, ҡасандыр мәҙрәсәлә абыстайҙан ғәрәп һабағын алған, ҡултамғаһын сатай-ботай итеп латинса сыймаҡлай белгән өләсәйемде тиңһенеп етмәй, артҡа ҡалыңҡырап, ығышып барам. Мәгәр уның бер үҙен ер аяғы ер башындағы икенсе осҡа йөкмәндереп ебәреп ултырыу төптө белекһеҙлек, әйҙүкләмәгән хәлдә лә эйәрер инем, ыумас һалынған, ҡоромло ҡолаҡтарына сым тотҡа беркетелгән сүлмәкте, яулыҡҡа төрөлгән тос төйөнсәкте күтәрешеп барырға ла мыҡтынан ҙурыраҡ бер кеше кәрәк бит әле.

Тап булған, осрағандарҙың күҙенә артыҡлап бәрелмәй ҡырлауҙаныраҡ барһа ла өләсәйем сафлыҡ, паклыҡ менән тотош урамды тултырып, аҡ күлдәгенән, аҡ яулығынан, аҡ сәстәренән бар тирә-йүнгә нур, яҡтылыҡ сәсеп атлай төҫлө. Башҡалар алдындағы бейеклеген һаҡлап, әлеге мәлдә яуланған дәрәжәһен тотоп, ханбикәләй башын ғорур сөйөп, ашыҡмай ғына һеңдерә баҫып, абруйлы атлай. Төптәнерәк уйлап ҡараһаң, зиһенлегә нимәгә хәҙерге еңелелпе белем, ул былай ҙа зирәк, былай ҙа аҡыллы, отҡор, күпте кисергәс, күпте белә, баштарына сур, бәлә, ҡайғы төшкәндәрҙең ауырлыҡтарын яҡшылыҡ, игелек, миһырбанлыҡ аша еңеләйтер дауаһы...

Ҡаршыбыҙға осрағандар юл биреп янтайып беҙҙең менән йылы, ихтирамлы, түбәнселекле иҫәнләшәләр ҙә, ҡыҙыҡһыныуҙарын еңә алмай, ҡайҙа китеп барыуыбыҙҙы белешергә итәләр. Өләсәйем кинәйәләп, уратып яуап бирә: "Түбәнге оста ине әлеге йомошобоҙ, башҡа урындарға ла һуғылырға иҫәп..." Беҙҙең ауылда шундай ырым бар, әгәр ауырыуға барыуыңды, уға инеп-сығыуыңды ят күҙҙәрҙән, һаҡ ҡолаҡтарҙан, иләк ауыҙҙарҙан йәшерә алһаң, сирҙең зәһәре баҫыла, көс-ҡеүәте кәмей, мәкере аймыла.

Гелән өтә баҫып, сымыры атлап йөрөүгә, тауыҡ сүпләһә лә бөтмәҫ донъя мәшәҡәттәрен йүгермәләп хәстәрләп урынеренә еткереүгә күнеккән еңел һөйәкле Әлмәғиҙә был юлы түрҙәге урындығына арҡыры йәйелгән түшәккә ятып ҡаршы алды. Бәләкәй генә өйҙәге тынсыу һауаға екһендергес, танауҙы ярып барған әсе дарыу еҫе өҫтәлгән. Шулай ҙа тәҙрәләренә, ишек яңаҡтарына, түшәм тапҡырынан мейес уратаһына, урындыҡ буйына тартылған, күркәм биҙәк һалынған селтәрле ҡорғандар торлаҡҡа үҙенсәлекле, ҡабатланмаҫ йәм, ҡот биреп торалар. Бигерәк оҫта шул Әлмәғиҙә ҡарсыҡ, теген мәшәҡәттәрен һуяһынан, һыпыра, тотҡарлыҡһыҙ башҡарып тотош ауылдың оло-кесеһен бер үҙе кейендерә, тиһәң дә һис кенә лә арттырыу булмаҫ.

Ҡарсыҡтың тар маңлайлы, ас яңаҡлы былай ҙа йоҡа йөҙө һарғылт балауыҙ төҫөн алып, ныҡ һурылып киткән, ошоғаса барыһына ҡыҙыҡһыныусан ҡараған теремек күҙҙәренең нуры, осҡоно ҡайтҡан, улар тирә-йүнгә йонсоу, битараф ҡарайҙар, ай-һай, бының ниндәйҙер уның артынан ҡалмай эйәрә торғайны. Әле ҙур йәшкелт күҙҙәрен моңһоу ҡыҫа төшөп, мейес ҡырлауында тормаҫтан һуйҙайып ята, иркәләү-наҙлауға ла мырылдап яуап бирмәне. Һиҙгер йән хужабикәһенең мөшкөл хәл-торошон һиҙә, төшөнә шикелле. Һөйләшеүҙәрен уйынкөлкөгә бормай ғына биниһая ваҡыт һәүетемсә көңгөр-ҡаңғыр килеп, әүәлгене иҫтәренә төшөрөп, тормош күренештәрен теүәлләп теҙеп, ауылдың һуңғы яңылыҡтарын яңыртһалар ҙа, алама сир тураһында бөтөнләй һүҙ сыҡманы, һөйләшеүҙең ибен, яйын, рәтен белгән өләсәйем ҡыҙыҡһынманы, ҡорҙай кәүҙәһен ҡаҙ мамығы тултырылған күпмәһенә һеңдергән ауырыу иһә ыҙалатып көс-ҡарыуын алған, миктәткән сырхауын ситләтеп, урап үтергә тырышты. Саманан ашырып маҙаһыҙлап оҙаҡ ултырырға теләмәгән өләсәйем ҡайтырға тип ҡуҙғалырҙан элек ауырыуҙы хәстәрләне:

- Суйын сүлмәктәге аш тиҙ арала һыуына һалып бармай торған, шулай ҙа оҙаҡҡа һуҙмай, ихлас ҡына итеп тәғәмләнеп ал. Иртән генә мейестән алынған күмәскә ҡушып, әле генә бешелгән май ҙа төргәнмен төргәккә. Һауытты ни, икенсе килгәндә алырмын әле, ҡапылдан кәрәгеп китһә бәлән, берәрен йүгертермен. - Берәре, тигәне кем булһын, шул, арыу-талыу белмәгән, ҡайыш табан мин инде.

Әлмәғиҙә кипкән ирендәрен ялай биреп ҡуйҙы, үрелеп тәҙрә ҡашағаһына ҡуйылған ҡырлы стаканды алып, һыу уртланы:

- Яңы ғына, һеҙ күренер алдынан ғына, эсем һыртыма сыҡҡансы һыйланып алғайным.

Нимә ейгәне, нимә ҡапҡаны билдәһеҙ, түрбаштағы ҡашығаяҡ түңкәреүле, янындағы артһыҙ ултырғыста ваҡ ҡына киҫәктәргә бүлгеләнгән ҡаты ҡорот ҡына күренә бары, өҫтәүенә, бәләкәй өй эсенән бешкән аш еҫе лә сыҡмай. Хәйләләшә Әлмәғиҙә, күңеле аш һөймәүен, тамаҡтан ҡала барыуын башҡаларҙан нисек тә йәшерергә тырыша.

- Ярай, әләйһә, һәр ризыҡтың үҙ урыны, улай уҡ ныҡ һыйланғасың, быныһы кискелегеңә. - Өләсәйем әйтелгәнде ыңғайы бер йөпләй һалды. - Шулай ҙа йәнең ни теләй, Әлмәғиҙә, әйт кенә. Хәҙер ҡайтам да етештерә һалып берәрен кире йүгертәм! - Исемем менән өндәшһәсе, юҡ бит, өйҙә саҡта минә балам, йә улым, ти, башҡа ерҙә иһә, ситят берәүгә әүереләм. Бының да үҙенә күрә серле әтнәкәһе барҙыр, һис шикһеҙ, барҙыр. Шулай булмаһа, урамға сыҡҡанда муйыныма мулла олатай яҙып, төйнәп биргән бетеүҙе тағып, әйләндереп-тулғандырып өшкөрөп-төкөрөп сығармаҫ ине. Осоҡ маҙарҙан ҡасырыуылыр, ен-пәрейҙән ҡурсалауылыр. Семтем дә май әҫәре ҡунмаған йоҡа, ҡаҡса тәнле, ҡарайып ҡояшта янған, балта һабылай оҙон муйынлы, таҡыр башлы, ҡарпыш ҡолаҡлы, бирән ҡорһаҡлы, ҡаҡ сираҡлы үҙем дә шайтандан артыҡ булмаһам, һис тә кәм түгелмен, "аяғы ептәй, ҡорһағы көптәй", тигән һүҙҙәр фәҡәт миңә тәғәйенләп әйтелгәндәр һымаҡ.

- Мәшәҡәтләнмәгеҙ, бар һыйниғмәтем алдымда.

- Алдындағынан тәмлерәкте, ашаулығындағынан татлыраҡты ҡабаһы килә ҡайһы саҡ. Һонтор Миңлебайҙың Хәҙисәһе иренән лимун таптырып, ҡыр быуынына төштө бит ауырлы сағында. Ҡыш уртаһында уны һинә ҡайҙан табайым, тип киреләнә тегеһе. Үҙем дә ныҡ торҙом, сәләмәт бәпес һөйәһең килһә, миңә тимәһә Ҡаф тауы артынан табып апҡайт, тинем. Өфөнөң үҙәк баҙарынан килтерҙеләр. "Күрҙем, күңелем булды, туйҙым!" тип лимунды ҡабып та ҡарамаған Хәҙисә. Шуны онотма, әхирәт, көҫәгән, йәнең таптырған ризыҡ шифалы дауаға әүерелә сырхаған сағында.

- Ҡарбуздан ауыҙ итергә ине... Хәҙер уның иң өлгөргән сағы. Һалҡын ғына ҡарбуз киҫәген ҡапҡым килә үҙәккә үтеп.

- Һин таптырған ауылдағы ризыҡ түгел икән, хәйерһеҙ...

- Әйтәм бит, борсолмағыҙ, минең мыжыуым бөтмәҫ. Бөгөн ашағым килгәне иртәгә таң атыуға үтә ул...

- Улай тимә, табырбыҙ ҡарбуҙын да. Баҙар көнө күрше Фазылйән бригадир район үҙәгенә йыйына ине, ишетеп-белеүемсә, үтенесемде кирегә һапламаҫ, шунан алдырырмын.

- Хәстәрегеҙ былай ҙа баштан ашҡан, көнө ҡоро түгел, сабыулап килә һалып етәһегеҙ, тупһама саң ҡундырмайығыҙ. Миңә ҡалһа, ҡайҙа ҡабаланырға, ҡайҙа өтәләнеп йүгерергә, ятырмын әле көтөп... - Әлмәғиҙә өләсәйем йөҙөндә килеп-китеп йөрөгән бар әхирәттәренә бер юлы рәхмәтен белдерҙе.

**(Дауамы бар).**

✓ **"Аҫылташлы Иҙел башы" исемле йыйынтығыбыҙҙың исем туйын уҙғарҙыҡ. 20 авторҙың ижад емештәренән төҙөлдө был китап. Район һәм республика баҫмаларында, интернет биттәрендә әҫәрҙәре баҫылып тора.**



*ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ*

**Сабир Шәрипов исемендәге "Иҙел башы" яҙыусылар ойошмаһы етәксеһе, Белорет районы 2-се Инйәр мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, тәрбиә эштәре буйынса директор урынбаҫары Әлиә Саматованың яҙғандары тиҙ арала үҙ уҡыусыларын тапты. Ул үҙе лә табышлы - яңынан-яңы хикәйәләре матбуғат биттәрендә баҫылып тора. Уның район мәҙәниәт йортоноң "Елмерҙәк" башҡорт халыҡ театры артисы икәнен дә онотмайыҡ. Ваҡыт етмәгән саҡтарҙа ғаилә ярҙамға килә. Буй еткергән ике улы Динислам менән Рамазан да ныҡлы терәк һәм таяныс.**

# ҺӨЙӨҮ ОРЛОҒО СӘСКӘНДӘР,

## мин дә һөйөү орлоғо сәсәм...



**➔ Әлиә, яҙмышың мәктәп, уҡыусылар менән бәйле. Заман, уның талаптары ла тиҙ үҙгәреүсән. Белем биреү һәр саҡ көнүҙәк булып ҡалһа ла, уҡыу-уҡытыу системаһы ла үҙгәрештәргә дусар ителә. Кем ул бөгөнгө көндә уҡытыусы?**

- Уҡытыусы булып эшләүемә 27 йыл булып китте. Ошо ваҡыт арауығында бер тапҡыр ғына ла дөрөҫ һөнәр һайлауымда икеләнмәнем һәм үкенмәнем. Эшемә шатланып барам һәм ҡәнәғәтләнеп ҡайтам. Донъяла ниндәй генә үҙгәрештәр булһа ла, уҡытыусы үҙ һөнәрен яратһа, ул һәр ваҡыт төрлө ваҡиғаларҙан, килеп тыуған ҡаршылыҡтарҙан сығыу юлын табасаҡ тип уйлайым. Эйе, замана үҙгәрә, балалар үҙгәрә, тибеҙ, ә тәжрибәм шуны иҫбатлай: балалар һәр ваҡытта ла бала булып ҡала. Улар эскерһеҙ, асыҡ, ышаныусан, ябай һәм ихластар. Бары тик улар менән уртаҡ тел табып, әйткәненә ҡолаҡ һалып, ауыр мәлдәрендә терәк, тайып киткәндәрендә таяныс булырға ғына кәрәк. Бөгөнгө көн уҡытыусыһы һиҙгер психолог, хәстәрлекле әсәй, тоғро дуҫ, ышаныслы серҙәш, белемле остаз, алдынғы әйҙәүсе тип уйлайым.

**➔ Ижад юлына аяҡ баҫыуыңа ла күп ваҡыт үтеп китте. Уңыштарың, табыштарың етерлек. Нимә ул һинең өсөн әҙәбиәт донъяһында йәшәү һәм ижад итеү?**

- Әҙәбиәт донъяһынан бала саҡтан айырылманым инде. Уҡытыусыларым Мәрйәм Сабирйән ҡыҙы Бураҡаева һәм Зилә Гәрәй ҡыҙы Шәйбәковалар ваҡытында сабый йөрәгенә орлоҡ сәскәндәр. Һуңынан юғары уҡыу йортондағы бихисап остаздарым ул орлоҡто үҫтереүгә күп көс һалғандар. Аҙаҡ инде үҙем уҡыусыларымдың күңелендә әҙәбиәткә һөйөү һендерҙем. Һәм бына инде 6 йыл серле, мауыҡтырғыс ижад донъяһындамын. Һис шикһеҙ, оҡшай. Яңы әҫәрем мейемә килеп оялау менән кәйефем күтәрелә, атлап түгел, осоп йөрөйөм. Ҡағыҙға төшәсәк емешемдең сюжетын, геройҙарын күҙаллап, шулар менән йәшәйем. Ә инде бешеп өлгөргән әҫәремде уҡыусыға тәҡдим итеп, ыңғай һүҙҙәр ишетеү - бәхеттең күге. Әҫәрҙәремде тәүгеләрҙән булып уҡып, фатиха биреүсе Мансур Һиҙиәтовҡа, Мөнир Ҡунафинға, Салауат Әбүзәргә, Әхмәр Үтәбайға сикһеҙ рәхмәтлемен.

**➔ Әлиә, әлеге мәлдә һин Белоретта яҙыусылар ойошмаһын етәкләйһең. Ойошманың бурыстары һәм маҡсаттары тураһында белге килә. Ниндәй эштәр һеҙҙең өсөн өҫтөнлөклө буласаҡ?**

- С.Шәрипов исемендәге "Иҙел башы" яҙыусылар ойошмаһын етәкләүемә теүәл 8 ай булып китте. Мансур ағай Һиҙиәтов тергеҙеп, гөрләп эшләп киткән ойошманы һүндермәйенсә алып китеү - ҙур яуаплылыҡ минең өсөн. Ойошмалағы нескә ижади күңелле, хисле ижадсылар минең күҙемә өмөтлө күҙҙәрен төбәгән. Күптәре минән өлкән. Мин уларҙың өмөттәрен һүндермәй, ышаныстарын аҡларға тейеш. Шуға төрлө маҡсаттар алып, иң һыҙғанып эшкә тотондоҡ. Дамир Шәрәфетдинов исемендәге асыҡ район конкурсын республика кимәлендә уҙғарҙыҡ, район уҡыусылары араһында "Бөртөкләп алтын йыябыҙ" исемле ижади конкурс үткәрҙек, "Ағиҙел " журналының 6 -сы һанында ойошмабыҙ шағирәләренең шиғырҙары донъя күрҙе, 2-3 августа "Аҫылташлы Иҙел башы" исемле йыйынтығыбыҙҙың исем туйын уҙғарҙыҡ. 20 авторҙың ижад емештәренән төҙөлдө был китап. Район һәм республика баҫмаларында, интернет биттәрендә ойошмабыҙ ағзаларының әҫәрҙәре баҫылып тора.

Пландар күп, атҡараһы эштәр бихисап. Ойошмабыҙға яңы ижадсылар килде. Алдағы маҡсат - шәхсән китаптар баҫтырыу. Әйткәндәй, балалар әҙәбиәте секцияһы Фәйрүзә Кинйәбаеваның әҫәрҙәрен тикшереп, ыңғай баһа бирҙе лә инде. З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә баҫылыр тигән өмөттә ҡалабыҙ. Иң төп маҡсатыбыҙ - камиллашыу. Шуға ла киләһе айҙарға абруйлы ҡәләм оҫталарын саҡырып, семинарҙар үткәреүҙе күҙаллайбыҙ. Уҡымлы, ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс әҫәрҙәребеҙ менән уҡыусыларыбыҙҙы ҡыуандырып, әҙәбиәт донъяһын сағыуыраҡ итеү - беҙҙең төп хыялыбыҙ.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА әңгәмәләште.**

*ПРЕМИЯҒА ТӘҠДИМ ИТЕЛДЕ*

# КҮҢЕЛ ҠОЯШЫН БАЛҠЫТА

**"Яҡты хистәрҙе баҙлатып, өй йылыһын һаҡлап, миҙгелдәрҙең ҡәҙерен белеп, күңелдәге ҡояшыбыҙҙы балҡытып йәшәйек!" - тип яҙа үҙенең яңы ғына сыҡҡан " Балҡыһын күңел ҡояшы!" исемле китабында "Башҡортостан ҡыҙы" журналының баш мөхәррире, Шәйехзада Бабич исемендәге республика йәштәр премияһы лауреаты, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәре Гөлназ Мират ҡыҙы Ҡотоева.**

Китапта уның "Баш мөхәррир һүҙе" рубрикаһында баҫыла килгән яҙмалары тупланған. Һәр бер яҙмаһы авторҙың күңел түренән сығарып теҙелгән, береһенән-береһе матур ынйы тиҫбеһен хәтерләтә. Маһир һүҙ оҫтаһы кешене кеше иткән юғары хистәр, тойғолар, әхлаҡ тураһында йөрәктән-йөрәккә еткерер, һәр кемдең ҡараңғы күңел мөйөшөн яҡтыртыр һүҙҙәр, образдар тапҡан. Һәр һүҙе йөрәккә май булып яғыла. Авторға ҡушылып хистәр дауылына, эмоциялар солғанышына биреләһең, көйәһең, ҡыуанаһың, уйланаһың. Күңел һыҙлауҙарына шифа бирерҙәй, күп аңлашылмаған күренештәрҙән андары томаланғандарҙың күңел пәрҙәләрен асып ебәрерҙәй, күңелдәрҙә өмөт саткылары ҡабыҙырҙай, күңел ҡояшын ҡабыҙып, балҡытып ебәрерҙәй көскә эйә был китап.

"Ваҡытында килһен бәхет!" ти баш мөхәррир. Уның серен дә асып бирә: дөрөҫ теләк теләргә, эс серенде кемгә һөйләргә белергә, яратыуыңды әйтергә һуңламаҫҡа, был яҡты донъяларға килгәнебеҙ өсөн генә бәхетле булырға, йән йылыһы менән бүлешә белергә, йәшәү көсөн ҡайҙан алырға, усағыңды нисек һүрелтмәҫкә. "Нисек төн сыҡтың, әхирәт?" яҙмаһын уҡығас, "әхирәт" һүҙенең асылы минең өсөн тағы ла тәрәнерәк һәм ҡәҙерлерәк яңғырай башланы.

Яҙмаларҙы Гөлназ Мират ҡыҙы үҙенең шәхси тормошондағы фәһемле ваҡиғалар менән дә, хикмәтле хикәйәләр, әйтемдәр, мәҡәлдәр, аҡыллы фекерҙәр менән дә оҫта ғына итеп үреп байытып ебәрә. Үҙе лә ҡатын-ҡыҙ, шәхес булараҡ асыла һәм, үҙең дә аңғармаҫтан, шағирәнең мөғжизәле серле донъяһына ылығаһың. Тынғыһыҙ, эҙләнеүсән, рухлы, талантлы журналист, шағирә булғанға ла ул "Башҡортостан ҡыҙы" журналының ҡотон һаҡлап килә .Шуға яратҡан журналыбыҙ ҙа беҙҙең өсөн терәк, кәңәшсе, серҙәш, күңел торошобоҙға ауаздаш булып ҡала.

Гөлназ Ҡотоева үҙе яҡты күңелле, яҡты хисле булараҡ, уның яҡты энергетикаһы китабына ла күскән. Был китапты ҡулға алғас та һиҙелә. Күңелендә ҡояш йөрөткән кеше генә нурлы китап сығара ала. Талантлы шағирә һәм журналист Гөлназ Мират ҡыҙы Ҡотоева, һис шикһеҙ, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияға лайыҡ шәхес.

**Ләйсән ЙӘНИЕГЕТОВА,**
**башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.**
**Хәйбулла районы Аҡъяр ауылы.**

*БАШҠОРТСА АТАМАЛАР*



# ҠОШСОҠ, ИСЕМЕҢ НИСЕК?

***Һарығош, үтәбикә*** - русса "иволга". Сыйырсыҡтан бер аҙ ҙурыраҡ, оҙонсараҡ кәүҙәле ҡош. Ата һарығоштоң түҫө асыҡ һары, ҡанаттары ҡара, суҡышы ҡыҙыл булһа, инә ҡош һәм йәш һарығоштар - һарғылт-йәшел, сыбар түшле була. "Үтәбикә бейә һау" тигән һымағыраҡ һайрай.

***Һандуғас, былбыл*** - русса "обыкновенный соловей". Турғайҙан бер аҙ ҙурыраҡ, һорғолт был ҡош тураһында күптәребеҙ ишеткәне бар. Кемгәлер уның бер нисә тапҡыр ҡабатланып-ҡабатланып йырлаған моңло көйөн ишетергә лә тура килгәндер, әлбиттә. Шағирҙарҙы илһамландырырлыҡ, халыҡ йырҙарында данланырлыҡ ябай ғына ҡиәфәтле, әммә иҫ китерлек сихри тауышлы ҡоштоң түҫө ниндәй һуң? Өҫ яғы һәм ҡойроғо ҡуңыр-көрән, ә аҫ яғы - көрән-көл түҫөндә. Һандуғастың шиҡылдаҡ тигән төрө лә бар, был төрө һандуғастарҙың иң матуры һанала. Русса "варакушка".

***Өкө, ҡолаҡлы ябалаҡ*** - русса "филин". Иң ҙур ябалаҡ, ҡанаттарының иңе 2 метрға етә. Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостандың Ҡыҙыл китаптарына индерелгән. Ҡуйы ерән, ҡайһы саҡта һарғылт түҫлө, алыҫтан айырылып торған ҡара тимгелдәр менән сыбарланған, ҡабырғаһында һәм ҡорһағында арҡыры һүрәте, алыҫтан ялбырап күренгән "ҡолаҡтары" бар. Күҙҙәре ҡыҙғылт-һары. Осһа, тауышһыҙ оса, баҫымды икенсе ижеккә төшөрөп, "у-һууһ" тигән тауыш сығара. Ябалаҡтың башҡа төрҙәре: ҡуян ябалағы - русса "белая сова". Ялан яҡтарында һирәк ҡышлаусы, ҡанат ҡағыуы метр ярымға етеүсе ҙур ғына, ҡолаҡһыҙ ябалаҡ. Һомай, һаҡалтай ябалаҡ - бородатая неясыть. Ҙур ғына, ҙур башлы ҡош, ҡанаттарын яҙһа, метр ярымға етә. Күҙҙәрен уратып алған түңәрәк һыҙаттар уны башҡа ябалаҡтарҙан айырып тора. Суҡышының аҫтында ҡара "һаҡалы" ла бар. Тауышы өкөнөкөнән түбәнерәк һәм тоноғораҡ. Урал ябалағы - русса "длиннохвостая неясыть". Ябалаҡтың был төрө лә ҙур кәүҙәле, метрҙан ашыу ҡанатлы, шына һымаҡ ҡойроҡло, түшендә сыбар "семәрле" ҡош. Эт өргән һымаҡ итеп "һау-һау-һау" һәм ҡалын ике ижекле итеп "һу-буу" тигән тауыш сығара. Һупайҙы, һупылдаҡ ябалаҡ - русса "мохноногий сыч". Байғош ябалаҡ - домовой сыч, һаҡ, суҡ, кескәй ябалаҡ - воробьиный сыч.

***Бөркөт*** - русса "беркут". Беҙҙең яҡтарҙа осраған иң ҙур ҡош, буйы 80-90 см, ҡанаттарын яҙһа, 211 см оҙонлоғона етә. Түҫө йәшенә ҡарап үҙгәрә. Дүрт йәшенә тиклем ҡойроғо аҡһыл була, аҙаҡтан - көрәнәйә. Кешеләр тарафынан ныҡ эҙәрлекләнгәнгә күрә, бөркөттәр юғалыу сигендә. Бөркөттәрҙең бүтән төрҙәре һәм уларҙың русса атамалары түбәндәгесә яңғырай: көсөгән, дала бөркөтө - могильник; ялан бөркөтө - степной орел. Башҡорттар борон өйрәтелгән бөркөт сөйөп, бүрегә, төлкөгә, ҡуянға, илеккә һунар иткән. Диңгеҙ бөркөтө, балыҡ бөркөтө, аҡҡойроҡ бөркөт - орлан белохвост. Диңгеҙ бөркөтө ҙурлығы яғынан тәүгеһен уҙып та китә. Ҡанаттарын йәйһә, иңе 2,5 метрға етә.

**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабын файҙаланып,**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ Ҡыҙҙарының башҡалар алдында, бер-береһе алдында ғына шулай яҡшы булып күренергә теләүен аңланым: донъяһы таҙа, үҙе ҡараулы, өҫтәлендә - һый. Әммә ихласлыҡ ҡына юҡ.



ИНТЕРНЕТТАН



# АШ ТОҘҺОҘ БУЛҺА ЛА...

■ Тоҙһоҙ аштың бөтөнләй тәме юҡ кеүек. Шулай ҙа диетологтар был тәмләткесте артыҡ ҡулланырға кәңәш итмәй. Улар фекеренсә, организмға тәүлегенә 6 грамм тоҙ етеүенә ҡарамаҫтан, кеше көнөнә уртаса 10-30 грамм тоҙ ашай. Тоҙло аш-һыу тәм рецепторҙарын ҡуҙғытып, асығыу тойғоһон барлыҡҡа килтереү һәләтенә лә эйә. Һөҙөмтәлә, артыҡ ашау һимереүгә килтерә, тимәк, таяныу-хәрәкәт аппаратына һәм йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына көс төшә. Ашты артыҡ тоҙлап ашау шешенеүгә, артериаль ҡан баҫымының күтәрелеүенә булышлыҡ итеүе бар.

■ Кәрәҙле телефондан оҙаҡ аралашыу организмға зыянлы булыуын, ә компьютер уйындары күҙгә кире йоғонто яһауын һәм психикаға ауыр тәьҫир итеүен барыһы ла белә. Бынан тыш психологтар ял итергә киткән осорҙа барлыҡ донъя мәшәҡәттәрен өйҙә ҡалдырырға тәҡдим итә. Эштән тыш ваҡытта ла төрлө проблемалар хәл итергә маташһағыҙ, һеҙ башығыҙҙы ял иттермәйһегеҙ, тип иҫәпләй улар. Барлыҡ эштәрегеҙҙе компьютер һәм кәрәҙле телефоныбыҙ менән бергә эш урыныбыҙҙа ҡалдырып китегеҙ.

■ Көн уңышлы үтһен өсөн һәр иртәне яҡшы кәйеф менән ҡаршыларға кәрәк. Музыка терапияһының көсөргәнешлекте бөтөрөүе һәм һаулыҡҡа ыңғай тәьҫир итеүе билдәле. Эшкә йыйынғанда ғына түгел, өй йыйыштырғанда ла яратҡан көйөгөҙҙө тыңлағыҙ. Көн дауамында ҡабул ителгән азыҡтарҙың иң мөһиме - иртәнге аш. Иртән сәләмәт аҙыҡ ашау ҡандағы шәкәр кимәлен нормаға килтерә һәм организмға кәрәкле туҡлыҡлы матдәләр бирә. Шуға ла иртән ҡәһүә һәм тәм-том менән сикләнмәгеҙ, ә етерлек кимәлдә аҡһым һәм емеш-еләк ашағыҙ. Йәшел сәй ҙә антиоксиданттарға бай, йоҡонан торғас та бер сынаяҡ йәшел сәй эсеү организмды кәрәкле матдәләр менән байыта.

■ Зифа буйлы булырға хыялланған ҡатын-ҡыҙҙар йыш ҡына шәкәрҙән баш тартып, шәкәр алыштырыусы ҡуллана. Күптәр был шәкәр алыштырыусыны организм өсөн бөтөнләй зарарһыҙ, тип иҫәпләй. Әммә уның составында ацесульфам йөрәктең ағзаларҙы ҡан менән тәьмин итә алмауына, цикломат бөйөр сирҙәренең көсәйеүенә килтереүе ихтимал. Шәкәр алыштырыусылар үт ҡыуығы юлдары сирҙәре менән яфаланыусыларға ла зарарлы. Ҡайһы берәүҙәр шәкәр урынына фруктоза, сорбит йәки ксилит ҡуллана, әммә улар калорияһы буйынса шәкәрҙән айырылмай. Табиптар фекеренсә, иң зарарһыҙы булып фруктоза тора, сөнки уның составында организмға зыян килтереүсе компоненттар аҙыраҡ.

■ Бөгөн сәләмәт тормош алып барыусылар араһында йога киң таралған. Көнөнә йога менән 30 минут ҡына шөғөлләнеү ҙә хәтерҙе, стресҡа ҡаршы тороусанлыкты яҡшырта, хәүеф тойғоһон түбәнәйтә. Бынан тыш, төрлө күнегеүҙәр йоҡоһоҙлоктан, баш ауыртыуынан ҡотҡара, ҡан баҫымын яйларға булышлыҡ итә. Рәсми статистика күрһәтеүенсә, йога менән даими шөғөлләнеү һалҡын тейҙерепауырыу осрағын 40 процентка кәметә.

ЙӘНӘШӘБЕҘҘӘ

# ЗАРЛЫ ТҮГЕЛ ОЛПАТ УҘАМАН

**Яңғыҙ ғүмер иткән ирҙәр... Һәр ауылда ла бар улар. Юҡ-юҡ, өйләнмәй ҡыркты, иллене уҙып барғандар хаҡында әйтмәйем, йәки ғәйеп үҙҙәрендә булып, ҡатынын айырып, яңғыҙ йәшәгәндәрҙә лә эшем юҡ. "Бергә-бергә - ғүмергә" тигәндәй, өйләнешеп, йорт һалып, матур донъя ҡороп, балалар үҫтереп, балҡытып тормош көтөп ятҡанда, ҡатынын юғалтып, яңғыҙ тороп ҡалған ирҙәр, олпат ағайҙар хаҡында һүҙем.**

Ундайҙарҙы мин үҙебеҙҙең Бөрйән районы буйынса күп беләм, күптәре менән аралашам. Шуны аңғарам: ҡатындары имен-һау саҡта нисек һәм ниндәй инеләр, шул холоҡ-фиғелдәрен юғалтмай, зарланмай, төшөнкөлөккә бирелмәй, рухы һынмай балаларының ҡәҙерле аталары, ейән-ейәнсәрҙәренең, бүләсәләренең яратҡан олаталары булып ҡала белә уларҙың күбеһе. Берәүҙәре нисәмә йылдар ғүмер иткән ғаилә йортоноң ҡотон, хәләл нигеҙҙе һаҡларға тырышып, яңғыҙлыҡ ауырлығын еңергә үҙҙәрендә көс, түҙемлек табып, ныҡышып бер үҙе көн итһә, икенселәре балалары ҡарамағында. Балаңа һыйыныуы ла барыһына ла эләкмәй шул, улың үҙеңдеке лә, киленең ниндәй йәки улың үҙе ниндәй бит әле? Балалары тарафынан урамдарға сығарып ташланған ҡарттарыбыҙ ил буйынса аҙмы ни! Асарбаҡтарҙың да бер ҡатламы шундайҙарҙан хасил даһа!

Районыбыҙҙың Мораҙым ауылында йәшәгән Бәшир ағай Айытбаев менән электән танышмын, хәлен белешеп, һорашып торам. "Бирешәһе түгел әле Бәшир ағайың, балалары һәйбәт ҡарай", - ти мораҙымдар. Мораҙымға юл төшөп, инеп сыҡҡанымда ла күрәм: Рөстәм улының иркен һәм күркәм донъяһында ҡәҙерле ҡунаҡ һымаҡ ултыра Бәшир ағай. Өҫ-башы таҙа, кәйефе күтәренке, тауышы көр, хәтере шәп, һөйләр һүҙҙәре күп. Килене Миләүшә, ҡайным, тип бөтөрөлөп йөрөй...



Бәшир Айытбаев Мораҙым ауылындағы оло йәштәге һанаулы ғына кешеләрҙең береһе, 85 йәше менән бара. "Һуғыш осоро балалары беҙ, нисек аслыҡтан үлмәгәнбеҙҙер, аптырайым, - ти ағай. - Әсәйемдең көсө үлтермәгәндер инде..."

Атаһы Муллағәләм Айытбаев һуғыш сыҡҡан йылы фронтҡа алына, 1943 йылда Харьков йүнәлешендә хәбәрһеҙ юғалыуы хаҡында ғаиләгә ҡайғылы ҡағыҙ килә. Ауыр ҡайғынан сәсрәп китергә ине лә, бөтә ил башынан йөрөй һуғыш афәте, түҙергә, йәшәргә кәрәк, дүрт баланы йәшәтергә кәрәк! Бәҙрисафа бер эштән дә ҡурҡыу белмәгән сая һәм көслө рухлы тырыш ҡатын, үҙен аямай колхоз эшендә: ағасын да ҡырҡа, кәбәнен дә һала, һалда ла йөрөй, мал да баға, баҫыуҙа ла бил бөгә. Ошо урында уйлап ҡуйыла: яугирҙарға һәйкәлдәр бар, тылда көс түккән ҡатындарҙың да исемен мәңгеләштерергә ине ауылдарыбыҙҙа.

"Һуғыштан һуңғы ҡытлыҡ, ҡатмарлы йылдарҙа үҫеп ир еттек беҙ,- ти ағай.- Барыбер уҡыны, һәләт булғандыр инде, насар уҡыманым мин, ауылдағы башланғысты тамамлап, Байназарға барғанда ғына ауыр булды, асыҡтыра, өҫтә йүнле кейем юҡ. Әсәй Күркәтауға ағас ҡырҡырға киткәс, уҡыуға бармай йөрөй инем, уҡытыусыларыбыҙ Мораттшин Ғәббәс, Дәүләтшин Мырҙабай ағайҙар саҡырып алып, йәнә парта артына ултыртты. Бер йыл Байназар детдомында ла уҡып алдым. Туғыҙынсыны Байназар мәктәбендә уҡыным. Ул йылы уҡыу йүнле булманы, уныш ныҡ уңғайны, өлкән кластарҙы эшкә күп йөрөттөләр. Бер ваҡыт директор килеп инде лә, беҙҙе теҙеп ҡуйып, кемдең исеме сыға, шулар алға сығығыҙ, тип, исемлек уҡый башланы. Минең дә

ФӘҺЕМ

# ИЗГЕЛЕК ЭШЛӘ ЛӘ...

## һыуға һал



**Оло йәштәгеләр башҡаларҙың хәстәрлегенә мохтаж булыуҙан бигерәк, үҙҙәрен кәрәкле һәм файҙалы итеп тойғоһо килә. Быға мин яңыраҡ 85 йәшен тултырған өлкән быуын вәкиле менән һөйләшкәндән һуң тағы бер тапҡыр инандым.**

"Шөкөр, балаларым яҡшы ҡарай, ашайым тиһәм, алдыма - ашарға, эсәйем тиһәм, эсергә ҡуялар. Түшәгем таптаҙа булһа ла, аҙна һайын алып ҡайтып йыуып торалар. Әммә шуныһы менән килешеп бөтмәйем: дүрт ҡыҙымдың береһе бер йәйлап ултырып һөйләшкәне юҡ. Килеләр ҙә, ярыша-ярыша таҙартып, йыуып, йыйыштыралар ҙа ҡайтып та китәләр. Бергәләп ултырып хатта сәй эскәнебеҙ ҙә юҡ. Иғтибар итһендәр әле былар тип, ҡайһы берҙә эш боҙоп ҡуям. Бына кисә тәҙрә төбөндәге гөлдең тупрағын иҙәнгә түктем. Әрләү түгел, исмаһам, өндәшмәнеләр ҙә. "Мин шуны эшләнем, быны эшләнем" тип, бер-береһенә телефондан отчет бирҙеләр ҙә, шуның менән вәссәләм", - тип зарланды ул.

Был һөйләшеүҙән инәйҙең үҙен балаларына кәрәкле итеп тойорға теләүен генә түгел, ә уның ҡыҙҙарының башҡалар алдында, бер-береһе алдында ғына шулай яҡшы булып күренергә теләүен аңланым: донъяһы таҙа, үҙе ҡараулы, өҫтәлендә - һый. Әммә ихласлыҡ ҡына юҡ.

Эйе, итәк тултырып, бала үҫтереп тә, олоғайғас, яңғыҙлыҡта тилмергән әсәй-атай байтаҡ арабыҙҙа. Бер үҙе йәшәгән яңғыҙ тигәнде аңлатмай бит әле, тиер кемдер. Эйе, бәхәсләшмәйем. Үрҙә атап киткән инәйгә лә ҡыҙҙары көн һайын килеп тора. Көн һайын йыуындыралар, ашаталар, эсерәләр. Әммә бер үҙе йәшәү менән яңғыҙлыҡ төшөнсәләре араһында айырма ла бар бит әле. Ысынлап та, бер үҙе йәшәп тә үҙен яңғыҙ тоймаған, киреһенсә, ошо яңғыҙлыҡҡа өҫтәнлек биргән, балаларының, ейән-ейәнсәрҙәренең ығы-зығылы, шау-шыулы тормошонан ваз кискәндәр була. Ә кемдер балалары менән йәшәп тә үҙен яңғыҙ тоя.

Тәүгеһе - балаларына мәшәҡәт тыуҙырыуҙан йәки улыныңмы-килененеңме, ҡыҙынынмы-кейәүененме ҡырын ҡарауынан ҡурҡып, бәлки, оялып, яңғыҙ йәшәүҙе хуп күрә. Ҡулынан килгәнсә йорт хәстәрен үҙенсә башҡарып, йәшәүен дауам итә. Ундайҙар, ғәҙәттә, яңғыҙ тормошона бөтөнләй зарланмай.

Балалары, яҡындары араһында үҙен яңғыҙ тойғандарҙың хәле иһә аяныслыраҡ. Тыштан, бәлки, улай тойолмаҫ та. Ундайҙарҙың өҫтө бөтөн, тамағы тук. Тик күңелдәре генә китек...

Анау инәйҙең кесе ҡыҙы: "Күпме игелек ҡылһаҡ та рәхмәт әйтмәйһең", - тип әйтә икән. "Изге эште йәшерен, дөрөҫөрәге, бер кем дә белмәгәндә ҡылығыҙ һәм уны башҡаларға белдереүҙән, күрһәтеүҙән, һөйләүҙән оялығыҙ", тигән бер аҡыл эйәһе. Ғөмүмән, ҡылған миһырбанлығың өсөн рәхмәт йәки бүләк көткән кешене игелекле, киң күңелле тип әйтеп булмай. Изге ғәмәл ҡылыу күңел талабы булырға тейеш ул. Эскерһеҙ ярҙам иткәндә генә кеше ҡәнәғәтлек кисерә. Ҡарт атай-әсәйҙәр ҙә мохтаж ошондай ихласлыҡҡа.

Лена АБДРАХМАНОВА.

> ✓ *Йыйылыштарҙа ла ул ҡурҡып торманы, ауылдың проблемаларын ҡыйыу күтәрҙе, етешһеҙлектәрҙе ярып әйтте, ауылым, тип йәшәгән ысын патриот инде. Етәкселәр бик өнәп етмәһәләр ҙә уны тыңланылар, һүҙен һүҙ иттеләр.*

исем сыҡты. Директор: "Аҡса алып килһәгеҙ, уҡыйһығыҙ, кемдең хәле юҡ, уҡыуҙан сығарыла", - тине. "Мин фронтовик балаһы, райсоветтан ҡағыҙ алып киләм", - тиһәм дә тыңламаны. Шулай итеп минең белем туғыҙ класс менән осланып ҡуйҙы. Колхозға эшкә сыҡтым. Ә колхозда бер ҡасан да ниндәйҙер шарт ҡуйманылар, эштән күп нәмә юҡ, эшлә генә. 12 йәшемдән хеҙмәт юлымды башланым, йәйгелек ат башында йөрөнөм, сос инем, бүтән эштәргә лә яраным. Тик шуныһы, хеҙмәт кенәгәһен 18 йәшемдән генә астылар. 42 йыл стажым бар, шуның 38 йылын малсылыҡта үткәрҙем. Хеҙмәт ветеранымын".

1956 йылда армияға алына 19 йәшлек Бәшир. Алыҫ Көнсығышта Тымыҡ океан яры буйында хеҙмәт итә. "Адмирал Захаров командаһында хәрби төҙөүсе инем мин, отличник булып хеҙмәт иттем, Почет таҡтаһынан төшмәнем", - тип һөйләй ул ғорурлыҡ менән.

Армиянан ҡайтҡас, ике йыл самаһы һатыусы булып ала ла, йәнә фермаға бара, һыйыр көтә. 1963 йылда малға йөрәге ятҡан уҙаманды Йылайырға уҡырға ебәрәләр. Ветеринарға уҡып ҡайта ла һөнәре буйынса эшләй башлай: көн тип тормай, төн тип тормай, мал араһында, мал һаулығы һағында була. Артабан уны фермаға мөдир итеп ҡуялар. "Телем тик торманы минең, етешһеҙлекте әйтә лә ҡуя торғайным, шуға бик оҡшап етмәнем, мөдирлектән сығарып ебәрәләр, ферма артта ҡала башлаһа, кире ҡуялар. Байназарҙағы Иманғолов Межәүир ағайҙың бер колхоз йыйылышында: "Теймәгеҙ шул Бәширгә, атыу фермағыҙ ҡолай бит", - тигәне лә булды. Һуңынан беҙҙең ферманы Бәшир фермаһы, тип йөрөттөләр. Тураһын әйткәнем өсөн етәкселәр яратмаһалар ҙа йыл һайын бүләк бирә торғайнылар, йә аҡсалата, йә әйберләтә. Минең өсөн быныһы тағы ла яҡшыраҡ ине, награда менән балаларҙы аҫрап булмай бит, ә минең ғаилә ҙур булды"...

Һүҙгә әүәҫ ағай тағы бына нимәләр һөйләне: "Тәүәккәл булдым мин, хәҙер ҡайһы бер малайҙар ҡартайғансы өйләнмәй йөрөйҙәр, ундайҙарҙы малай тимәй, кем тиһең? Мин Рәшиҙә еңгәңә армияға тиклем өйләнеп киттем, хеҙмәттән ҡайтыуыма Рәмзәнә ҡыҙым тыуғайны. Ҡатыным Ғәлиәкбәр ауылы ҡыҙы, һәйбәт ғаиләлә тәрбиә алған, уңған, яҡшы кеше ине, 1992 йылда 55 йәшендә фажиғәле үлеп ҡалды. Туғыҙ балаға ғүмер бирҙек беҙ. Заһир улыбыҙ йәшләй вафат булды, бүтән балаларыбыҙ имен-һауҙар, матур донъя көтәләр, балалар үҫтерәләр. Атай, тип өҙөлөп торалар, килеп хәл белешәләр. Ҡыҙҙарымдың да, улдарымдың да ғаиләләрендә именлек, шуныһы ҡыуандыра. Рөстәм улым ауылда нығынды, тырышып донъя көтә. Балаларым бөтәһе бергә йыйылһа, һабантуй һымаҡ була беҙҙә. Ҙур ырыуға нигеҙ һалғанбыҙ Рәшиҙә еңгәң менән, тип, маһайып та алам, бөгөн минең 22 ейәнейәнсәрем, 20 бүләсәрем бар. Шунан, үҙең уйлап ҡара, бәхетлеме мин, бәхетһеҙме? Кемгә эләгә әле ундай бәхет. Бына улым менән киленем яҡшы ҡарай, нимә кейәйем, нимә ашайым, тип аптырамайым, рәхәтлектә көн итәм, ожмахта йәшәйем".

Рөстәм ғаиләлә кесе малай. Ауылдың Ағиҙел йылғаһы буйынан үргә һуҙылған оҙон урамының арғы осонда йорт һалып инә улар. Миләүшә килен Ҡолғана ауылы ҡыҙы, үҙе лә ҙур ғаиләлә 11 бала тәрбиәләнеп үҫкәндәр.

Донъялары бөтөн, иркен йәшәйҙәр, күп итеп мал көтәләр. Ихатала донъя көтөргә еңеллек бирерлек техника: йөк машинаһы, мотоблок. Рөстәм атаһына оҡшап, ат йәнле кеше, кәртәһендә эш аты, ҡолонло бейәһе тора. "Арба-санам, ат менән бесән сапҡысым, йыйғысым да бар, - ти донъяһын түңәрәкләп көтөргә ынтылып торған егәрле ир. - Ҡырҙа ҡалдырмай машинам менән бесәнде ташып алабыҙ..." Хөкүмәт эше лә бар уның, ауыл клубын йылыта. Миләүшә өйҙә, донъяның ҡотон тотоусы. Дүрт бала атаәсәһе улар. Балаларына бик матур тәрбиә бирәләр: бәләкәйҙән эшкә өйрәтәләр, белем алыуҙа, һөнәр һайлауҙа аҡыллы кәңәш биреп, яҡындан ярҙам итәләр, әҙәплелек, мәрхәмәтлелек ҡағиҙәләрен мейеләренә һеңдерергә тырышалар. Балалары итәғәтле, яғымлы. Олаталарын яраталар, һағынып ҡайталар.

Моразым урамында Сәриә апайҙы осраттым. Сәриә апай, Фәйзрахман ағай Аҫылғужиндар менән 1987-1990 йылдарҙа Моразым мәктәбендә бергә эшләнек. Ауылдың хөрмәтле кешеләре улар. Сәриә Мансур ҡыҙы Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы. Бәшир ағай хаҡында һорашҡас, алдан әҙерләп ҡуйғандай матур һүҙҙәрен йәлләмәне, тотош хикәйәт итеп һөйләп ташланы, баҡһаң, ағайҙы үҙе лә яҙырға уйлап йөрөгән икән. "Бәшир ағай ауылдың ҙур абруй ҡаҙанған кешеһе, - тине ул. - Элек-электән ауылдың кәрәкле кешеһе булды, малың ауырыһа, йүгереп килер ине, кәңәшкә лә уға барҙылар. Уның башланғысында ауылда күп эштәр башҡарылды. Ферманы алдынғылыҡта тотто. Үткән тормош юлы, башҡарған эштәре күптәргә өлгө. Юғары уҡыу йортон бөтмәһә лә күпте белгән, белемле кеше. Йыйылыштарҙа ла ул лидер, оратор булды, ҡурҡып торманы, ауылдың проблемаларын ҡыйыу күтәрҙе, етешһеҙлектәрҙе ярып әйтте, колхозым, ауылым, тип йәшәгән ысын патриот инде. Етәкселәр бик өнәп етмәһәләр ҙә уны тыңланылар, һүҙен һүҙ иттеләр. Ә ауылдаштар ағайға ҙур хөрмәт менән ҡараны. Хәҙер хәлен һорашһам: "Мин, Сәриә һеңлем, санаторийҙа ятам", - тип ебәрә хатта. Һәр яңғыҙ ҡалған ир-атҡа, айырыуса оло йәштәге ҡарттарыбыҙға Рөстәм менән Миләүшә һымаҡ балалары иғтибарлы, хәстәрлекле булһындар ине", - тип тә әйтеп ҡуйҙы, үҙе лә ҙур хөрмәткә лайыҡлы Сәриә Мансур ҡыҙы.

**Мөнир ФӘЙЗУЛЛИН,**
**хеҙмәт ветераны.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ШАЙТАН ДА...

## йәйәүләп ҡасҡан

Намаҙ уҡымаған, ураҙа тотмаған бер ауыл ағайы юлға сыҡҡан. Шунда уға таныш булмаған бер әҙәм эйәргән. Ауыл кешеһенән ҡайҙа барғанлығын һорашҡас, тегеһе:

- Ҡаланан ҡайһы бер кәрәк-яраҡ алаһы бар, шунда барам әле, - тип яуап ҡайтарған.

- Мин дә һинең менән барһам яраймы? Юлда яңғыҙ йөрөү эсте бошора бит, - тигән.

Ауыл ағайы ризалашҡан. Икәүләп юлды дауам иткәндәр. Бара торғас, бер йөҙөм баҡсаһына килеп етә былар. Теге ауыл ағайы әхлаҡһыҙ булыу өҫтөнә ҡараҡ та икән. Тиҙ генә баҡсаға инә лә йөҙөм ашарға тотона. Етмәһә, баҡсаға зарар килһен тип, тәлгәш-тәлгәш йөҙөмдәрҙе өҙөп, ергә ташлай. Юлдашы бының сәбәбен һорашҡас:

- Баҡса минеке түгел, зарары хужаһына булһын, - тип яуап ҡайтара.

Юлды артабан дауам итә былар. Бара торғас, бер ауылға килеп етәләр. Нәҡ шул ваҡыт мәсет манараһынан өйлә намаҙына саҡырып аҙан яңғырай. Аҙан тауышын ишеткәс, юлда эйәргән кешенең сырайы боҙолоп китә. Күҙ осо менән генә юлдашына ҡарап ала. Уның мәсеткә инергә һис тә ниәте юҡлығын һиҙенгәс, һорай:

- Намаҙ уҡырға инмәйһеңме ни?

- Мин намаҙ уҡымайым, ураҙа ла тотмайым.

- Улайһа, туғаным, мин һиңә юлдаш була алмам.

Ауыл ағайы аптырап ҡала.



- Ниңә улай? Мин бит һиңә бер ниндәй ҙә насарлыҡ эшләмәнем.

- Дөрөҫ, минең алда бер ғәйебең дә юҡ. Ләкин бына һине лә, мине лә яратҡан Аллаһ ҡаршыһында ҙур ғәйебең бар.

- Нисек? Һүҙеңде әйтеп бөтөр, зинһар.

- Күпме юл үттек, ә һин Аллаһ хупларлыҡ бер нәмә лә эшләмәнең. Киреһенсә, ул хупламаясаҡ ғәмәлдәр ҡылдың. Кеше баҡсаһына индең, уға зарар килтерҙең. Аҙан тауышын ишетә тороп, намаҙ уҡырға ла ниәтең юҡ.

Ауыл ағайы уйға ҡала.

- Дөрөҫ һөйләйһең, әммә һин дә намаҙ уҡымайһың бит?

- Уҡымайым, сөнки мин кеше сүрәтенә ингән шайтанмын. Аллаһы Тәғәләнең бер генә әмеренә ҡаршы килгәнем өсөн дә уның хозурынан ләғнәтләнеп ҡыуылдым. Ә һин бер көн эсендә генә лә уның нисә әмерен үтәмәнең? Һине тоғро юлдан яҙҙырырға теләгәйнем. Ләкин хәҙер күрәм, һин минән дә аҙғыныраҡ икәнһең! Шайтан булыуыма ҡарамаҫтан, һинең кеүек гонаһлы бәндәнән ҡурҡам, шуға күрә лә яныңдан тиҙерәк китә һалам.

Шулай ти ҙә шайтан китеп бара. Ауыл ағайы башын ике ҡулы менән тотоп уйға сума: "Ҡара инде, ә! Хатта шайтан да минән ҡаса... Мин унан да гонаһлыраҡ микән ни?" Шунан күңеленә урғылып ташҡан үкенеү хисенә түҙә алмайынса, илап ебәрә.

- Йә, Рабби! Мине ғәфү ит! Бөтөн гонаһтарым өсөн тәүбә итәм. Бүтән һинең әмереңдән сыҡмаясаҡмын!

Шул һүҙҙәрҙән һуң был әҙәм, тиҙ генә тәһәрәт алып, намаҙға баҫа. Ҡалған ғүмерендә бүтән бер әшәкелек тә эшләмәй.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Илаһ телендә һөйләш

Аҡыллы кешеләр кем уңыш ҡаҙана, шуларҙың стилен күҙәтергә, уларға оҡшарға тырышырға ҡуша. Бер ваҡыт танышымдан ни өсөн уның һәр ваҡыт ҡаштарын һыйпауының сәбәбен һорағас, ул миллионер күршеһенең даими рәүештә ҡашын һыйпауы тураһында әйтте. Ләкин ҡаш һыйпап ҡына байып булмағанын аңлағыҙ. Былдай ҡараш Илаһты һоҡландыра алмай, был уның теле түгел.

Илаһ теле һүҙҙәргә генә түгел, ғәҙәттәргә нигеҙләнгән. Әммә был һеҙгә эшләргә этәргес биргән һүҙҙәр ҡулланыуға ҡамасауламай. Һүҙҙәр ижадҡа ҡағылғанда, кире күҙаллауҙарҙы юҡҡа сығарыуы мөмкин. Бәлки, шул рәүешле бер ваҡытта ла үҙегеҙҙең ижад менән шөғөлләнгәнегеҙҙе аңламаҫһығыҙ ҙа.

Элис официантка була. Уның шул тиклем Илаһҡа хеҙмәт иткеһе килә, әммә бының урынына уға клиенттарҙы хеҙмәтләндерергә тура килә. Ул үҙе теләп буш ваҡытында сиркәүҙә эшләргә ҡарар итә. Унда уға кәңәшмәләр ваҡытында кофе килтерергә, ял көндәрендә хәйерселәргә аш таратырға ҡушалар. Шул ваҡытта ғына ул хатта ресторанда хеҙмәтләндереүҙең дә үҙенә күрә рухи аспекты булыуын аңлай. Эше уға нығыраҡ оҡшай, ҡәнәғәтлек, бер үк ваҡытта килем дә килтерә башлай.

Ижади әүҙемлеккә башҡа инаныуҙар ҙа, мәҫәлән, хыяллана белмәйһегеҙ һәм эш һөҙөмтәгеҙ бер ниндәй ҙә әһәмиәткә эйә түгел, тигән ҡарашҡа ышаныу ҙа ҡамасаулауы мөмкин. Быңдай ҡараштарҙың сәбәбе ниндәй генә булмаһын, уларҙы бер үк һүҙҙәр менән юҡҡа сығарырға мөмкин. Бына Илаһ өсөн ысын әһәмиәтте раҫлаусы аффирмация:

Мин ижад итә беләм, сөнки ижади һәләтем бар.

Мин нимә кәрәк, шуны ижад итәм, ә минең ижад емештәре дөйөм ҡиммәткә эйә.

Әгәр был һүҙҙәр файҙа килтергәнен тойһағыҙ, уларҙы тәнегеҙҙе көсөргәнештән арындырып, көнөнә өс тапҡыр аҙна дауамында ҡабатлағыҙ. Көн һайын Илаһтың эргәгеҙҙә булыуын асығыраҡ тоя башларһығыҙ. Был билдәләр яҡшы яҡҡа ҙур үҙгәрештәр вәғәҙә итә.

Дөйөм хаҡ өлөштәр хаҡынан ҡиммәтерәк. Кеше үҙ юлы менән барырға күнеккән. Матди байлыҡҡа ынтылып, улар йыш ҡына мәйеттәр өҫтөнән атлай, Ерҙең тәбиғи байлыҡтарына ла иғтибар итмәй. Был тәбиғи экологияның, мөхиттең боҙолоуына килтерә. Һөҙөмтәлә фекерләү үҙгәрә, ситләшеү, төркөмдәргә бүленеү һәм һуғыштар башлана.

Әммә хәҙер барыһы ла үҙгәрә һәм был бик ваҡытлы.

Материалдарҙы ҡайтанан эшкәртеү, барлыҡ тереклекте һаҡлау идеяһы Ер-Әсәгә ҡарата ихтирамдың артыуы, кешенең тәбиғәт менән бер бөтөн булыуын аңлауға килтерҙе һәм ошо йүнәлештәге хәрәкәттәр әүҙемләште. Кеше аң, тән һәм йән кеүек ҡабул ителгән альтернатив медицинаның булыуын да аңланы. Дауалаусылар тәндең айырым ағзаларын ғына түгел, ә беҙҙе аң-тәнйән берҙәмлеге итеп ҡарай. Беҙ бөтөн, ә дөйөмдөң хаҡы айырым ағзалар хаҡынан ҡиммәтерәк. Был, ысынлап та, шулай. Бер өлөш үҙенең сикле аңына ғына эйә, ә бөтөнгә Илаһтың ҡатнашлығы һәм сикһеҙлек хас.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



## 3 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Чайки". [12+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Т/с "Морозова". [16+]
2.55 Т/с "Срочно в номер!-2". [16+]
4.37 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Ангел в сердце". [16+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**12.45, 13.45 Дневной канал БСТ.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).**
**14.45, 16.45, 23.00 Интервью. [12+]**
**15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 "Гора новостей". [6+]**
**15.45 Преград. Net. [6+]**
**16.00, 4.00 Автограф. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Патриот РФ. [12+]**
**18.00 БашГост. [12+]**
**19.00, 20.30, 23.15, 0.45 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Пофутболим? [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**1.45 Спектакль "Судьба выбранная мной". [12+]**
**3.15, 5.45 Дневной канал БСТ. [12+]**
**4.30 История одного села. [12+]**
**5.00 "Ете егет". [12+]**

## 4 ОКТЯБРЯ ВТОРНИК
### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Чайки". [12+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Т/с "Морозова". [16+]
2.55 Т/с "Срочно в номер!-2". [16+]
4.37 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Ангел в сердце". [16+]**
**11.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45, 23.00 Интервью. [12+]**
**12.00, 16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**12.45, 13.45 Дневной канал БСТ.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).**
**15.00 Детей много не бывает. [6+]**
**15.30 "Гора новостей". [6+]**
**15.45 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**17.00 Автограф. [12+]**
**17.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.00 "Елкән". [6+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Авангард" (Омск). КХЛ.**
**22.00 "Это моя профессия". [12+]**
**23.15 Колесо времени. [12+]**
**0.45 Спектакль "Райса+Файзи".[12+]**
**2.30 Д/ф "Один из тринадцати". [12+]**
**3.15, 5.45 Дневной канал БСТ. [12+]**
**4.00 "Автограф". [12+]**
**5.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [12+]**

## 5 ОКТЯБРЯ СРЕДА
### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.05 Т/с "Чайки". [12+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Т/с "Морозова". [16+]
2.55 Т/с "Срочно в номер!-2". [16+]
4.37 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Ангел в сердце". [16+]**
**11.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45, 23.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 История одного села. [12+]**
**12.45, 13.45 Дневной канал БСТ.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).**
**15.00 Детей много не бывает. [6+]**
**15.30 "Гора новостей". [6+]**
**15.45 "КультУра". [6+]**
**16.00 Тайм-аут. [12+]**
**17.00 "Это моя профессия". [12+]**
**17.45 "Курай даны". [12+]**
**18.00 Автограф. [12+]**
**19.00, 20.30, 23.15, 0.45 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**1.45 Спектакль "Таланты и поклонники". [12+]**
**4.15, 5.45 Дневной канал БСТ. [12+]**
**5.00 "Алтын тирмә". [0+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 6 ОКТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ
### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Чайки". [12+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Т/с "Морозова". [16+]
2.55 Т/с "Срочно в номер! На службе закона". [16+]
4.37 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Ангел в сердце". [16+]**
**11.00, 22.00, 5.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45, 23.00 Интервью. [12+]**
**12.00, 16.00 Историческая среда. [12+]**
**12.45, 13.45 Дневной канал БСТ.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.00 Новости (на баш. яз).**
**15.00 "Сулпылар". [0+]**
**15.30 "Гора новостей". [6+]**
**15.45 Ай текә. [6+]**
**17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**17.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.00 Башкорттар. [0+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев"(Уфа) - "Металлург" (Магнитогорск). КХЛ.**
**23.15 "Башкорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.30 Спектакль "Половецкая мистерия". [12+]**
**2.15 "Автограф". [12+]**
**3.15 История одного села. [12+]**
**3.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**4.00, 5.45 Дневной канал БСТ. [12+]**
**4.45 "Дорога к храму". [0+]**

## 7 ОКТЯБРЯ ПЯТНИЦА
### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.30 Ну-ка, все вместе! [12+]
23.45 Улыбка на ночь. [16+]
0.50 Х/ф "Ветер в лицо". [12+]
4.09 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Башкорттар. [6+]**
**10.30 "Автограф". [12+]**
**11.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45, 19.00, 23.00 Интервью. [12+]**
**12.00, 4.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**12.45 Патриот РФ. [12+]**
**13.00 БашГост. [6+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 18.00 "Йома". [0+]**
**14.15 "Курай даны". [12+]**
**15.00 "Алтын тирмә". [12+]**
**15.45 "Гора новостей". [6+]**
**16.00 "Аль-Фатиха". [12+]**
**17.00 "Байык-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**19.15 "Башкорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**20.00 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Честно говоря". [12+]**
**21.15 Дознание. [16+]**
**22.00 БашГост. [12+]**
**23.15, 3.45 "Ете егет". [12+]**
**23.45 Колесо времени. [12+]**
**1.15 Спектакль "Галиябану". [12+]**
**3.15 "Бай". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

## 8 ОКТЯБРЯ СУББОТА
### РОССИЯ 1
5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
12.00 Доктор Мясников. [12+]
13.05 Т/с "Сердце матери". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Доченьки". [12+]
0.45 Х/ф "Мне с Вами по пути". [12+]
3.55 Х/ф "Нинкина любовь". [12+]
5.32 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30, 19.00 Новости (на баш. яз).**
**7.45 Автограф. [12+]**
**8.15 БашГост. [12+]**
**8.45 "Ете егет". [12+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "Елкән". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "КультУра". [6+]**
**11.00 "МузКәрәҙ". [6+]**
**11.30 Д/ф "Страна войлока". [6+]**
**12.00 "Это моя профессия". [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз)./. [12+]**
**13.00 Үткән гүмер. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 История одного села. [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев"(Уфа) - "Динамо"(Москва). КХЛ. [12+]**
**19.30, 4.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байык-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 0.00, 3.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башкорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.45 Спектакль "Красная звезда". [12+]**
**2.00 Следопыт. [12+]**
**2.30 Колесо времени. [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

## 9 ОКТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### РОССИЯ 1
5.35, 3.15 Х/ф "Кузнец моего счастья". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
12.00 Большие перемены.
13.05 Т/с "Сердце матери". [16+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Миллионер". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45, 23.00 Автограф. [12+]**
**8.15 "Бай". [12+]**
**8.45 "Курай даны". [12+]**
**9.00 "Йома". [0+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 Ай текә. [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с"Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 Үткән гүмер. [12+]**
**13.45 История одного села. [12+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 "Дорога к храму". [0+]**
**16.00, 2.00 Историческая среда. [12+]**
**16.30 Моноспектакль "Цыплёнок из букваря". [12+]**
**18.00 "Елкән". [6+]**
**19.45 Патриот РФ. [12+]**
**20.00 "Честно говоря". [12+]**
**20.45 Дознание. [16+]**
**21.00, 22.30, 4.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.30, 3.00, 3.15 Спектакль "Мы с тобой одной крови". [12+]**
**1.15 Итоги недели (на рус. яз).**
**2.30 "Это моя профессия". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры
**6 октябрь "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадырова), мелодрама. 16+
**7 октябрь "Ат уйнатып алдан бара..."** (З. Бураҡаева), театрлаштырылған тамаша. 12+
**8 октябрь "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Я. Пулинович, Г. Яхина романы буйынса). 18.00 16+
**9 октябрь "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия. 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры
**4 октябрь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажара. 11.00 6+
**6 октябрь "Хәтер юғалтҡыс мөхәббәт"** (В. Красногоров), комедия. 12+
**8 октябрь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажара. 12.00 6+
**"Ғашиҡтар көнө"** (Н. Ғәйетбай), музыкаль комедия. 18.00 16+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры
Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:
**7 октябрь "О чем поет орнамент?"** (В. Аношкин). 17.00 12+
**8 октябрь "Три поросенка"** (Д. Гараева). 12.00, 14.00 0+
**9 октябрь "Лиса-сирота"** (О. Штырляева). 12.00, 14.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы
**4 октябрь "Мне имя - Марина"** әҙәби шишәмбе. 6+
**5,7 октябрь "Көҙгө JAM"** джаз фестивале. 6+
**8 октябрь "Музыку слушаем вместе"** 11.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе
**6 октябрь "Һөйәрҙәргә ҡапҡан"** (И. Йомағолов), комедия. 12+
**7 октябрь "Мәскәүгә лә керҙек беҙ, Парижды ла күрҙек беҙ!"** концерт. 6+
**8 октябрь Премьера! "Аҡ ҡалфаҡ"** (М. Фәйзи), драма. 18.00 12+
**9 октябрь "Маленькая история о маленьком Муке"** (С. Астраханцев), әкиәт. 12.00 0+
**"Килдең, киттең - хуш, байғош!"** (М. Задорнов), лирик комедия. 18.00 12+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры
**6 октябрь Премьера! "Һәйбәт ҡыҙыҡай Лида"** (А. Ивашкин), трагикомедия. 13.00, 19.00 12+
**8 октябрь "Сказка о царе Салтане"** (А. Пушкин), әкиәт. 13.00 0+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Октябрь (Рабигел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 3 (7) дүшәмбе | 5:53 | 7:23 | 13:30 | 16:48 | 18:45 | 20:15 |
| 4 (8) шишәмбе | 5:55 | 7:25 | 13:30 | 16:46 | 18:43 | 20:13 |
| 5 (9) шаршамбы | 5:57 | 7:27 | 13:30 | 16:44 | 18:40 | 20:10 |
| 6 (10) кесе йома | 5:59 | 7:29 | 13:30 | 16:42 | 18:38 | 20:08 |
| 7 (11) йома | 6:01 | 7:31 | 13:30 | 16:40 | 18:35 | 20:05 |
| 8 (12) шәмбе | 6:02 | 7:32 | 13:30 | 16:37 | 18:33 | 20:03 |
| 9 (13) йәкшәмбе | 6:04 | 7:34 | 13:30 | 16:35 | 18:30 | 20:00 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*✓ Һәр ҡыйынлыҡтың сиселеше бар. Ауырлыҡ шунда: ул сиселеште табырға кәрәк.*

*(Эвви Неф).*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# 5 ОКТЯБРЬ - УҠЫТЫУСЫЛАР КӨНӨ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**38-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Итака. Ғәбдиев. Хужабикә. Хикәйә. Монах. Лифт. Аҙым. Имам. Йәнбикә. Айыҡ. Сайт. Иртә. Джордж. Ата. Хәрби. Трюм. Аран. Тау. Әләм. Аҡса.

**Вертикаль буйынса:** Мәрйә. Ай. Ханнанова. Хакимиәт. Ғата. Рәхмәт. Бала. Тәбиғи. Әхмәт. Икс. Алма. Әйтем. Рагу. Алеут. Ус. Хисаметдинова. Алоха. Әҙәм. Әхмәтҡужин.

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## СИКЛӘҮҘӘР ОҘАЙТЫЛА...



**Рәсәй банкы сит ил валютаһы алыуға сикләүҙәрҙе оҙайтты. Сикләү 2023 йылдың 9 мартына тиклем ғәмәлдә буласаҡ. Был сара Рәсәй банктарына көнбайыш илдәрҙең ҡулаҡса валютаһын һатып алыуҙы тыйған санкцияларға бәйле.**

Әгәр валюта иҫәбе йәки вклад 2022 йылдың 9 мартына тиклем асылған булһа, унан ҡулаҡса доллар йәки евро алырға мөмкин. 10 мең доллар йәки уның евролағы эквиваленты элеккесә ҡулаҡса валютала алырға мөмкин. Ошо сумманан артығын үҙ иҫәбеңдән һумдарҙа ғына алырға була. Аҡса банк курсы буйынса һумға әйләндерелә. Банк курсы Үҙәк банктың аҡса биргән көндәге рәсми курсынан кәм була алмай. Банктар теләгән һәр кемгә кассаларына 2022 йылдың 9 апреленән һуң ингән евро һәм долларҙы ҡулаҡсала һата ала. Башҡа валюта һатыуға сикләүҙәр юҡ.

## ТЕЛӘМӘҺӘГЕҘ...



**Шәхси мәғлүмәттәрегеҙҙе бирергә теләмәһәгеҙ, закон буйынса мотлаҡ булмаған осраҡтарҙа һеҙгә хеҙмәт күрһәтеүҙән баш тарта алмайҙар. Килешеү төҙөүҙән йәки килешеү шарттарын үтәүҙән баш тартҡан өсөн 50 мең һумға тиклем штраф янай.**

Хәҙер әйбер һатып алғанда йәки хеҙмәт күрһәткәндә төрлө һылтау менән, хатта кәрәкмәгән осраҡтарҙа ла, кешеләрҙән телефон номерҙарын, электрон почта адресын һәм башҡа шәхси мәғлүмәттәрҙе алалар. Тәү сиратта, был онлайн-магазиндарға ҡағыла. Әгәр һатып алыусы гәҙәти йәки интернет-магазин хеҙмәткәрҙәренә үҙенең тулы исемен, телефон һәм банк картаһы номерын, электрон почтаһын һәм өй адресын хәбәр итергә теләмәй икән, уға хеҙмәт күрһәтеүҙән баш тарта алмайҙар, тип билдәләне Дәүләт Думаһы Рәйесе Вячеслав Володин.

*ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА*



## ҮҪМЕРҘӘР ТҮЛӘМӘҺӘ...

**Үҫмерҙәр һәм йәштәр, закон буйынса, юл хаҡын түләмәгән өсөн балиғ булмағандарҙы йәмәғәт транспортынан төшөрөп ҡалдырыу ярамағанлығын белеп, аңлы рәүештә билет алыуҙан баш тарта. Ата-әсәләр, балаларын яҡлап, улы йәки ҡыҙы аҡсаһын бары тик "өйҙә онотоп ҡалдырған", тип, "хәлгә инмәгән" водителдәрҙе йәки кондукторҙарҙы ғәйепләргә әҙер, йәки үҙҙәре үк шундай ҡылыҡты хуплай.**

Тәү ҡарауға зыянһыҙ тойолған бындай шаярыуҙы ваҡытында туҡтатмаһаң, күңелһеҙ эҙемтәләргә килтереүе мөмкин. Яңы уҡыу йылы башланыу менән Башҡортостанда йәмәғәт транспорты кондукторҙарына ялыуҙар күбәйгән. Үҫмерҙәрҙең ата-әсәләре төрлө инстанцияларға: Хөкүмәткә, Транспорт министрлығына, пассажирҙар ташыусы транспорт компанияһы етәкселегенә яҙа, йәиһә социаль селтәрҙәрҙә ҡәнәғәтһеҙлек белдереп, комментарийҙар ҡалдыра. Бындай ҡәнәғәтһеҙлектең сәбәбе, ғәҙәттә, оҡшаш - бала юл хаҡын түләмәгән, ә кондуктор уны, иҫкәрмә яһап, ҡыйырһытҡан. Бер ҡараһаң, ваҡ-төйәк кеүек - йәш пассажир түләргә теләмәгән, картаһы эшләмәгән, ата-әсәһе аҡса һалырға онотҡан. Өҫтәүенә, башҡа пассажирҙар уны яҡлап, кондукторҙы тупаҫлыҡта ғәйепләргә мөмкин, шулай итеп низағ тыуа.

Был осраҡты пассажирҙарҙы ташыусы компания күҙлегенән ҡарайыҡ. Кондуктор пассажирҙан юл хаҡы алырға тейеш, ул үҙ вазифаһын намыҫлы башҡара. "Башавтотранс"тың гендиректоры Надир Самиев әйтеүенсә, әгәр ревизорҙар салонда "ҡуян"ды тотһа, кондукторҙы дисциплинар яуаплылыҡҡа тарттыра һәм премиянан мәхрүм итә, сөнки ул үҙенең яуапһыҙлығы арҡаһында предприятиеға зыян килтерә. "Кондукторҙан айырмалы, бындай пассажирҙы яуаплылыҡҡа тарттырырға ярамай. Федераль һәм төбәк ҡануниәтендә был мәсьәлә эшләнеп етмәгән, республикала билетһыҙ пассажирҙарҙы асыҡлау һәм уларҙы административ яуаплылыҡҡа тарттырыу вәкәләтенә эйә ойошма юҡ", - ти Надир Самиев.

Яҙа алмаған үҫмерҙәрҙең, бер төркөм булып, артабан юл хаҡын түләргә теләмәйенсә кондукторҙы ҡыҙҙырыуы һәм был ғәмәлдәрен видеоға яҙҙырып, социаль селтәрҙәргә һалыуы ла билдәле. Республика клиник психотерапевтик үҙәктең табип-психотерапевы Гүзәл Йосопова фекеренсә, бындай ҡылыҡ яҡшыға алып бармай. "Агрессив ҡылыҡ үҫмерҙәргә хас, ул өлгө итеп алырлыҡ "текәлек" билдәһе булып та ҡабул ителеүе мөмкин, әммә был насар, сөнки һөҙөмтәлә асоциаль шәхес үҫеүе ихтимал. Бала менән асыҡтан-асыҡ һөйләшергә, ҡылығының сәбәптәрен асыҡларға кәрәк. Бик күп ата-әсәләр өйгә арып ҡайта, улар үҙҙәрен эшенә, матди әйберҙәргә бағышлай, әммә баланы тәрбиәләү өсөн ваҡыт табырға кәрәк", - тип аңлата Гүзәл Йосопова.

Әгәр шаярыу булараҡ башланған хәл контролдән сыҡһа, ул иртәме, һуңмы, ололар һәм балалар өсөн күңелһеҙ эҙемтәләргә килтерәсәк. Ата-әсәләрҙе тейешле тәрбиә бирмәгән өсөн, ә балалар 16 йәштән кәмһетеү, һүгенеү, салонды боҙоу һәм башҡа ғәмәлдәр өсөн яуап бирә. Тимәк, низағ бер яҡ өсөн дә кәрәкмәй. Был осраҡта кондуктор һәм пассажир өсөн иң уңайлыһы - үҙ бурысыңды башҡарыу һәм үҙ-ара итәғәтле булыу.

ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# ТЕАТР МЕНӘН БЕРГӘ БУЛЫҒЫҘ...

**Ошо көндәрҙә Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһенең И. Йомағолов исемендәге башҡорт драма театры үҙенең 32-се иждад миҙгелен Мирхәйҙәр Фәйзиҙең "Аҡ ҡалфаҡ" спектакле менән асып ебәрҙе. Әҫәр "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Кесе Ватан мәҙәниәте" проекты сиктәрендә сәхнәләштерелде, ҡуйыусы режиссеры - Башҡортостандың халыҡ артисы Азат Йыһаншин. Спектакль тураһында төп ролдәрҙең береһен уйнаған Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Резеда ӘМӘКӘСОВА менән әңгәмәләштек.**





**"Аҡ ҡалфаҡ" спектаклендә һеҙ буй еткергән йәш ҡыҙ - Хәмдиә ролен башҡараһығыҙ. Күңелегеҙгә яттымы был героиня?**

- Спектакль буйынса һөйләшеүҙәр башланырҙан алда Азат Надир улы Йыһаншин шылтыратты ла: "Аҡ ҡалфаҡ"ты ҡуйырға уйлайбыҙ, һин формаламы?" - тип һораны. Ыңғай яуап алғас, Хәмдиә ролендә уйнауҙы ышанып миңә тапшырасағы тураһында белдерҙе. Шул ышанысты аҡларға тырыштым. Ә бит уйлап ҡараһаң, минең үҙемдең ҡыҙыма хәҙер егерме йәш. Шулай ҙа лирик герой - минең амплуа, булмышыма тап килә. Сәхнәлә инде 18 йылдан артыҡ эшләүем дә геройымды аңларға, уның күңел торошон, фиғелен һынландырырға ярҙам итте. Азат Надир улы ла, Хәмдиә менән һинең фиғел берүк, тойомлауың буйынса уйна, тип үҙ иркемә ҡуйҙы.

Хәмдиә - Сәлим мырҙа ғаиләһендә үҫкән бер бөртөк иркә ҡыҙ. Мәле еткәс, үҙенә йыр бағышлаған егет менән йәрәшәсәкмен, тигән теләк-шартын белдерә. Ҡыҙ был йырҙы үҙенә тиң күргән мырҙалар затынан булған кеше генә сығара алыр, тигән инанысsuccinct. Уҡый-яҙа белмәгән, ярлы бер көтөүсе илаһи моң тыуҙырыр, тигән уй башына ла инеп сыҡмай. Пьеса авторы Мирхәйҙәр Фәйзиҙең бер быуат элек сағылдырған төрлө ҡатлам кешеләренең бер-береһенә ҡарашы, ата-әсә һәм бала араһындағы мөнәсәбәт, кешенең хис-тойғолары уның бай йәки ярлы булыуына бәйләнеше, кешеләрҙең тәккәбберлеге, мөхәббәт һәм нәфрәт кеүек темалары бөгөнгө заман тамашасыһына ла таныш булып тойолор, моғайын. Әйткәндәй, минең менән төп ролдәрҙе хеҙмәттәштәрем Марат Зөбәйеров (Шаһтимер) һәм Илнур Атйетәров (Баҡый) башҡара. Ә икенсе составта төп ролдәрҙе йәш актерҙар Ҡәҙриә Мифтахова, Фәнил Ҡарасурин, Ирек Ибраһимов уйнай. Апрель-май айҙарында репетициялар үткәреп, отпускыға тиклем спектаклде әҙерләп, тапшырып ҡуйҙыҡ. Шул мәлдә үк сәхнә биҙәлеше - Даян Теүәлев, актерҙарҙың кейемдәре рәссам Әлиә Байрамғолова тырышлығы менән әҙер булғайны. Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәрҙәре Юлай Үҙәнбаев һәм Рәмзиә Мөхәмәтшина спектаклдең композиторы һәм ҡуйыусы балетмейстеры. Бик сағыу, зауыҡлы, ҡайһы осраҡта әкиәттәгеләй матур, һоҡланғыс күренешле спектакль килеп сыҡты.

Был театрҙа эшләгән дәүеремдә Мирхәйҙәр Фәйзиҙең өсөнсө спектаклендә төп ролде башҡарам. Иң беренсе "Ғәлиәбаныу" спектаклендә Ғәлиәбаныу, шунан "Аҫылйәр"ҙә Ләлә образдарын сәхнәгә сығарҙым. Әле Хәмдиә лә күңелемә ятҡан ролдәрҙең береһе. Ә бит бөтә ролдәрҙе лә шулай тулыһынса аңлап, йөрәгең менән ҡабул итеп башҡарып булмай.

**Театр тамашасыларын быйыл тағы ниндәй яңылыҡтар менән ҡыуандырасаҡ?**

- Тиҙҙән театрыбыҙҙа тағы бер иҫтәлекле ваҡиға көтөлә. Хәҙер Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһенең Башҡорт драма театры РСФСР-ҙың һәм Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған артисы, драматург Илшат Йомағоловтың исемен йөрөтәсәк. Ошо уңайҙан 6 октябрҙә шәхескә бюст асыла һәм тамашасыларға уның "һөйәрҙәргә ҡапҡан" тигән комедияһын ҡарарға тәҡдим итмәксебеҙ. Киләсәктә Илшат Йомағоловтың әҫәрҙәрен даими сәхнәләштереү маҡсаты ла бар етәкселектең, шуға ҡыҙыҡлы проекттар, ролдәр көтөп ҡалабыҙ. Балалар өсөн әкиәттәр, ғаилә менән килеп ҡарау өсөн тамашалар ҙа даими ҡуйыласаҡ. Бына тиҙҙән "Ҡорос. Яугир ат яҙмышы" (М. Ҡунафин) спектакленең премьераһы көтөлә.

Бөгөн барыбыҙҙың да күңелдәре тулышҡан, борсолоуҙарҙан йөрәктәр янған мәлдәрҙе бергә үткәрәйек, тип өндәшкем килә тамашасыларыбыҙға. Театр - ул нәҡ күңелдәрҙе бушата, ауыр уйҙарҙан бер аҙға ғына булһа ла арындыра, таныш-белештәрҙе күреп, хәл-әхүәлдәр һорашып, аралашып ҡайта торған урын. Бергә булайыҡ, донъялар тынысланып китһен!

**Сәриә ҒАРИПОВА әңгәмәләште.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## АТА АЛМАҒАН...

### йәйә һайлар

Ҡыш - ҡыҫыл, яҙ - яҙыл, йәй- йәйел, көҙөн үҙең белерһең.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бер аҡһаҡалдан: "Ни өсөн йыланды аҡыл символы тип йөрөтәләр?" - тип һорағандар. "Сөнки ул хәҡиҡәт кеүек әсе саға", - тип яуаплаған аҡһаҡал.

**(Су Дун-по).**

Һәр ҡыйынлыҡтың сиселеше бар. Ауырлыҡ шунда: ул сиселеште табырға кәрәк.

**(Эвви Неф).**

Сәйәси кампания - ул милләттең йөрәк тибешен ауыҙ асып тыңлау сәнғәте.

**(Фил Тьюсет).**

Юл насар булған һайын күҙгә нығыраҡ саң тула.

**(Михаил Ганин).**

Аҡсаһы аҙ булып та күңел күтәренкелегендә йәшәгән кеше - бәхетле, аҡсаһы күп булып та йән тыныслығы тапмағандар - бәхетһеҙ.

**(Демокрит).**

Тәбиғәттән берәү ҙә түбән йә бейек булмай, бары тик хеҙмәте генә кешене түбән йә бейек итә.

**(Һинд халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Әнәс исемле кеше үткер телле һәм шаян булыуы менән тирә-яҡта дан алған. Күптәр уның шаянлығына шаянлыҡ менән яуап биреп йә көтөлмәгән һорау биреп, уның иғтибарын яуларға тырышҡан. Аҡылға һайыраҡ һәм тәрбиәһеҙ бер егет Әнәсте аптыратмаҡсы була һәм уға: "Хөрмәтле Әнәс ағай, әйт әле, һин ҡасаныраҡ был донъяны ташлап китәсәкһең?" - тип һорай. "Ә ниңә һиңә минең үлеүем кәрәк?" - ти Әнәс. "Күптән түгел атайым беҙҙе ташлап, теге донъяға күсте, - ти егет. - Мин уға хат яҙҙым, хатымда һеҙгә, шуҡлығы менән танылған Әнәс ағайға, әлеге һорауҙы биреүем тураһында ла белгерттем. Бер рәхәтләнеп көлөп алһын, әйҙә. Тик был хатты атайыма нисек тә еткерергә кәрәк бит инде. Хатты уға һеҙ алып барып еткерә алмаҫһығыҙмы икән, тигәйнем". "Һиңә ярҙам итергә бик теләр инем дә ул, - ти Әнәс. - Ләкин һиңә атайыңа хат илтер өсөн икенсе кешене ялларға тура килер. Сөнки мин бик гонаһлымын һәм Хоҙай Тәғәлә мине туп-тура тамуҡҡа ебәрәсәк. Ә бына һинең кеүек "үткер телле" улды тыуҙырған һәм тәрбиәләгән атайыңды Хоҙай, моғайын, ожмахҡа ебәргәндер, сөнки ул бит һинең ҡылыҡтарыңа оҙаҡ ваҡыт түҙемлек күрһәткән..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 22039

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |
| Матбуғат таратыу | 252-39-99 |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
30 сентябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3540
Заказ - 1237

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.